# Һәнәк

3
МАРТ 2009

БЫЛ ҺАНДА:

АҘАШТЫРҒАН КИНДЕР
4-се бит

ҠАТЫН-ҠЫҘҘАР ҠӘЛӘМ САРЛАЙ
16-17-се биттәр




– Байрам менән, Ғәлимә Зәхмәтовна!
– С праздником, Галима Захматовна!

С. КИЯШКО

# Башҡорт АССР-ы төҙөлөүгә – 90 йыл

*Ҡулына тарих китаптары килеп эләкһә, Һәнәк уларҙы иғтибарһыҙ ҡалдырмай. Үҙе шаһит булған йәки булып өлгөрмәгән ваҡиғаларҙы барларға, хәтирәләргә бирелеп алырға ярата ул. Был юлы сәбәбе лә сығып тора: тап ошо көндәрҙә Башҡортостандың автономия алыуына 90 йыл тула.*

## Мөһим килешеү



1919 йылдың 20 мартында Совет хөкүмәте Ленин һәм Сталин тарафынан ҡул ҡуйылған «Башҡортостан Совет автономияһы тураһында Үҙәк Совет власы менән Башҡорт хөкүмәтенең Килешеү»ен раҫлай. Башҡорт автономиялы Совет Социалистик республикаһын төҙөү тураһындағы документ шулай атала. Ул шул уҡ йылдың 23 мартында «Известия» гәзитендә баҫылып сыға. Был көн Башҡорт автономиялы республикаһының тыуған көнө булып һанала.

Әхмәтзәки Вәлиди Туған үҙенең «Хәтирәләр»ендә был ваҡиғаны ошолай һүрәтләй: «23 мартта рәсми совет гәзиттәрендә Башҡортостан үҙ аллы йөмһүриәт тип иғлан ителде. Килешеү буйынса дүрт полк йәйәүле ғәскәре һәм өс полк кавалерияһы булған үҙ аллы Башҡорт армияһы үҙәк Ҡыҙыл армия командалығына туранан-тура буйһонорға тейеш. Был хаҡта Килешеүгә – 16, экономик идара хаҡында 4 пункт теркәлде. Килешеүгә Ленин, Сталин, Владимирский, Енукидзе, доктор Кулаев, мин, Бикбауов һәм Ғабдулла Әҙеһәмов ҡул ҡуйҙыҡ.»

Башҡортостан автономияһы – элекке Рәсәй империяһы биләмәләрендә барлыҡҡа килгән милли республикалар араһында беренселәрҙән рәсми танылыу таба. Милли азатлыҡ юлындағы был ваҡиға мәҙәниәтте, телде үҫтереүгә, хужалыҡтарҙы аяҡҡа баҫтырыуға уңайлы шарттар һәм мөмкинлектәр асырға тейеш була. БАССР төҙөлөү тарихында уның сиктәрен киңәйтеү ҙә ҙур әһәмиәткә эйә. Башта Өфө губернаһы, һуңынан Өфө губернаһы бөтөрөлөп, уға кергән Стәрлетамаҡ, Бөрө, Бәләбәй өйәҙҙәре республика составына индерелә. Башҡорт АССР-ы «Ҙур Башҡортостан» сиктәренә тиклем киңәйә. Өфө баш ҡалаға әйләнә.

Ваҡыт үтеү менән, илдә барған тәртипһеҙлектәрҙән ҡаҡшаған халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу өсөн яңы программа – НЭП ҡабул ителә, ауыл хужалығына трактор һәм башҡа техника ҡайтарылып, МТС-тар барлыҡҡа килә, завод-фабрикалар аяҡҡа баҫтырыла, колхоз-совхоздар төҙөлә. Баймаҡ районында сафҡа ингән Түбә фабрикаһында алтын сығарыу, мәҫәлән, 1922–1923 йылдарҙа илле ботҡа етә. 1934 йылда Ишембайҙан Өфөгә нефть тейәлгән тәүге поезд килә. Һанай китһәң, бындай ҡаҙаныштар бихисап. Улар бер өлкәне лә ситләп үтмәй, мәҙәниәт, матбуғатта ла күҙәтелә. Әйтәйек, 1925 йылдың 15 сентябрендә бөгөнгө «Һәнәк» журналының тәүге һаны «Яңы ауыл» гәзитенә ҡушымта – «Яңы ауыл һәнәге» булып сыға. 1926 йылда был ҡушымта ай һайын сыға торған «Һәнәк» журналына әйләнә.

Тап ошо йылдарҙа милли һәм партия баҫмалары үҫеш ала. Республика административ райондарға бүленгәс, район гәзиттәре барлыҡҡа килә. 1931 йылда 27 район гәзите эштәре яйлана: улар башҡорт, рус, татар һәм башҡа телдәрҙә баҫыла.

Бөйөк Ватан һуғышы башланғас та, башҡорт халҡы баҙап ҡалмай. Миңлеғәле Шаймуратов етәкселек иткән Башҡорт атлы дивизияһының ғына даны бөтә фронт буйлап тарала. Был һуғышта 300-ҙән ашыу яҡташтарыбыҙға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

Һуғыштан һуң республикала күп предприятиелар ҡабаттан аяҡҡа баҫтырыла һәм төҙөлә. Улар араһында Ҡарман ГРЭС-ы, Бәләбәй «Автонормаль» заводы, Учалы тау-байыҡтырыу комбинаты, Белорет металлургия комбинатындағы стан – 150 һәм башҡалар иң ҙурҙарҙан һанала.

Яңы Өфө, Яңы Ишембай нефть эшкәртеү заводтары сафҡа баҫа. Көйөргәҙе районында күмер промышленносы барлыҡҡа килә. Яңы ҡалалар – Октябрьский, Сибай һәм Күмертау ҡалалары үҫеп сыға.

1990 йылдың 11 октябрендә БАССР Юғары Советы сессияһы тантаналы шарттарҙа «Башҡортостандың дәүләт суверенитеты тураһында Декларация» ҡабул итә. Үҙ юлынан тайпылмай, инде суверенлы республика көндән-көн үҫә, матурая.

Оло еңеүҙәр аша килгән данлы ла, фажиғәле лә тарих биттәрен барлағанда, Һәнәк ғорурланып, йылмайып ҡуя. Сөнки беҙҙең халыҡ үҙ дәүләтендә милли тойғо йөрөтә, бай тарихын хөрмәтләй белә. Тап 90 йыл элек төҙөлгән килешеү республикабыҙ тормошона бик килешле булды, әле лә әһәмиәтен юғалтмай.

**Рәзилә ЫРЫҪҠУЖИНА.**

✦ *Һәнәк йәбенә*

# Аҙаштым



*Байтаҡ йылдар инде Өфөлә йәшәйем. Әҙәле калабыҙҙың бөтә мөйөшөндә һыпыртып йөрөһәм, һуңғы вакытта аҙаша башланым. Берәй ергә барырға булһам, бер иш исемдәге урамдар араһында, сырмалсыкка эләккән кеүек, буталам да куям. Ахырҙа «Уфа-2007. Атлас. Путеводитель» тигән китап һатып алдым да Өфөбөҙҙө ныклап өйрәнә башланым. Гилёв урамы – өсәү. Аралары бер-береһенән 200 – 250 метр булыр. Балаков, Минск, Пугачев урамдары – дүртәү. Дыуан тыкрыҡы нишләптер өсәү генә. Перевалочный, Жуков урамдары, икенсе Жуковский тыкрыҡы бер-береһенән бүленеп бөткән.*

*«Аврора» кинотеатры урынлашкан Рабкорҙар урамын белмәгән кеше юктыр. Хоҙайбирҙин урамының аркыры кисәлешендә лә Рабкорҙар урамы тигән яҙыуҙы күреп, әллә акылыма зәғифлек килә башланымы, тип торам.*

*Ҡыҫҡаһы, данлыклы калабыҙҙа бер иш исемле урам, тыкрыктарҙы барлап бөтмәле түгел. Ә бит гүзәл республикабыҙҙың шөһрәтле шәхестәре, ерһыу атамалары бихисап. Ниңә уларҙың исемен кушмаҫка?*

**Әнүәр ТУҠТАМЫШЕВ,**
тыл һәм хеҙмәт
ветераны.

А. АНДРЕЕВ




**– Әйҙә бабай, ерең менән бергә үҙеңде лә һатып алам.**
– Давай, дедуля, куплю и тебя вместе с землёй.

## Элеп алдым, һелкеп һалдым

12-се һан, 2008 йыл

### «Һаман килеп етмәй»

**Ишембай районының Биксән ауылы урамдарында электр уты юк. Был турала журналда хат баҫылып сыккайны.**

**Ишембай районы муниципаль районы хакимиәтенең аналитик-мәғлүмәт бүлеге етәксеһе Д. Арыҫланов редакцияға ебәргән яуабында ауыл урамдарына электр лампалары куйылыуын хәбәр итте.**

### «Йәмле лә йәрминкә»

**Өфө калаһының Затон биҫтәһендә ауыл хужалығы йәрминкәләренең бик ярлы ғына үтеүе хаҡында ине был мәкәлә.**

**«Етешһеҙлек контролгә алынды. Киләһе йәрминкәләрҙә ауыл хужалығы тауарҙарына заявканы күберәк биреү күҙаллана», – тиелә Өфө калаһы кала округының Ленин районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Л. Макшукованың яуабында.**

### «Һыу крандары олой»

**Өфө калаһындағы Союз урамының 35/1-се йортонда һыу крандары олой икән. Хәбәрсебеҙ редакцияға ошо хакта борсолоп хат яҙғайны.**

**Өфө калаһы кала округының торлаҡ хужалығы идаралығы муниципаль унитар предприятиеһының генераль директоры Б. Герасимов был йортта ремонт үткәрелеп, кәмселектәрҙең бөтөрөлөүе хаҡында яуап ебәрҙе.**



Марат КӘРИМОВ

## Һыйыр йылы

Урыҫтарҙа – Үгеҙ йылы,
Беҙҙә иһә – Һыйыр йылы.
Нимә генә тиһәгеҙ ҙә,
Һыйыр йылы – ул һый йылы.

Һыйыр – тимәк, май һәм ҡаймаҡ,
Һыйыр – тимәк, һөт һәм ҡатыҡ.
Ҡайғы күрмәй йәшә әйҙә,
Ошо ризыҡ тәмен татып.

Йот йылдарҙы беҙ күп күрҙек,
Һыйыр барға үлмәй ҡалдыҡ.
Ана тағы йотлоҡ килә,
Килгәнен дә белмәй ҡалдыҡ.

Тормош ауыр, тип зарланған
Бәндә менән килешмәгеҙ,
Шөкөр, хәҙер Һыйыр йылы,
Һыйыр барҙа бирешмәбеҙ.

Әйттем дә ул, һуңғы хәлдәр
Өмөтөмдө йыға һуҡты:
Дүрт күҙ менән көтөп алған
Һыйыр ҡыҫыр булып сыҡты.

Хуш, май-ҡаймаҡ!
Хуш, һөт-ҡатыҡ!
Ҡабат күреп булыр микән?

Әллә власть: "Бары бар!"– тип
Беҙҙең күҙҙе быуыр микән?

Үгеҙ йылы булғандарға
Әле донъя көтөп була.
Үгеҙҙе бит егеп була,
Һуғыш малы итеп була.

Беҙҙә лә шул үгеҙ булһа,
Беҙ ҙә рәхәт йәшәр инек.
Уны һуйып, һимеҙ итен
Йыл буйына ашар инек...

## Тағы байрамдар хаҡында

Һағынып һөйләү өсөн ҡалды –
Байрам – байрам ине элек.
Ә хәҙерге байрам иһә
Үҙенә күрә һуғыш кеүек.

Ҡайҙан алып бөтә тиһең
Милитарист ҡылыҡтарын,
Беҙгә ҡаршы ебәрә ул
Шешә-шешә полктарын.

Өҫкә килгән ошо яуға
Ҡаршы сыҡмай сарабыҙ юҡ,
Һуңғы полкын йыҡмай тороп,
Туҡтарға һис самабыҙ юҡ.

Һуғыш булмай юғалтыуһыҙ,
Шуны һөйләй үткәнебеҙ.
Яу ҡырында тора алмай
Ятып ҡала күптәребеҙ.

Яу үткәс тә беҙ – беҙ түгел,
Баштар сатнай, һыҙлай бауыр,
Йөрәк сәнсә – шул хәлдәргә
Сыҙауҙары, ай-һай, ауыр!

Эшебеҙ суп, байрамдар күп,
Шуға иҫтәр китеп тора.
Берепе үтеп тә өлгөрмәй,
Икенсеһе көтөп тора.

Ана тағы яңы байрам
Атаҡаға тора әҙер.
Быныһынан да иҫән ҡалһам,
Бомждарға бирәм хәйер...



## ✦ Яҙа юл яҙаға илтә
# Ваҡыт юҡ

– Уф, күңелһеҙ, ваҡыт үтмәй!

Көнө буйы өйҙә уралып-суралыуҙан Игорь елһенеп китте. Бер туҡтауһыҙ телевизор ҡарау ҙа ялҡытты. Әҙерәк һауа һулап килмәйсә булмаҫ. Егет кеше урамға сыҡҡан ыңғайға Алексей менән Шамил күҙенә салынды. Үҫмерҙәр гелән бергә йөрөйҙәр. Дөрөҫөн әйткәндә, ике-өс йәшкә өлкәнерәк Игорь – уларҙың командиры. Нисектер тәү танышыуҙан уҡ шулай килде лә сыҡты. Ул һөйләй, тегеләр иғтибар менән тыңлай: "Улай итәйек, былай итәйек. Һин шулай эшлә!" һәр ваҡыт башлыҡ әйткәнсә була. Игорь ике бармағын ауыҙына ҡуйып, әсе итеп һыҙғырыуға, малайҙар йәлп итеп был яҡҡа боролдо.

– Килегеҙ әле бында! – Тауышты ишетеүгә, Алексей менән Шамил шаптыр-шоптор йүгереп килеп тә етте.

– Сәләм!

– Сәләм! – Башлыҡ ҡустыларына етди ҡиәфәт менән ҡарап алды. – Әйҙәгеҙ, үҙегеҙҙе бер урынға алып барам. Унда бик күңелле буласаҡ.

– Ҡайҙа? Йыраҡҡамы?

Малайҙар йәшәгән Дим биҫтәһенә Өфө районының Жуков ауылы яҡын ғына. Дуҫтар ауылдың фермаһы янына йәйәү килде. Башлыҡ, ферма тирәләй урман кеүек ҡуйы булып үҫкән киндер үләненә күрһәтеп:

– Анау үләндең нимә икәнлеген беләһегеҙме? – тине.

– Һи, мин уны күптән беләмсе, – тине Алексей. – Онотторҙамы ни, теге ваҡыт икәү тартҡайныҡ. Эй, рәхәт булды.

– Шулай шул.

Дуҫтар йәһәт кенә киндер үләнен йыйып алды. Унан усаҡ тоҡандырҙылар. Әммә малайҙарға киндерҙе бешереп, кәйефләнеп ултырырға насип булманы. Шул мәлдә улар янына милиция хеҙмәткәрҙәре килеп сыҡты.

Быға тиклем дә иркенән шартлыса мәхрүм ителеп, һабаҡ алмаған Игорь Кирсанов терһәген тешләрҙәй булды. Судта ул, күҙҙәрен мөлдөрәтеп, яҡлау эҙләп тирә-яғына ҡаранды.

– Ғәфү итегеҙ, башҡаса улай ҡыланмам. Белмәнем.

Әммә һуң ине. Хөкөм ҡарары ҡаты булды. Теүәл бер йыл да һигеҙ ай ғүмерен тәрбиә колонияһында үткәрәсәк ул. Хәҙер Игорҙың:

– Уф, күңелһеҙ, ваҡыт үтмәй, – тип мажара эҙләп йөрөргә ваҡыты юҡ. Киндерҙән әҙерләнгән каннабистың (марихуана) наркотик һәм психотроп ҡулланмалар исемлегенә инеүен, уны ҡулланған йәки сауҙа иткән өсөн яза көткәнен аңларға ваҡыты етерлек.

**Венер ИСХАҠОВ.**

## Тыйнаҡлыҡ

Шағир йыйынтыҡ сығарҙы,
Эй шат, хәс тә сабый бала.
Микрофон тотҡан хәбәрсе
Унан интервью ала.

– Һиндә тәбиғәт бүләге –
Шиғыр яҙыу һәләте.
Яҙғандарың араһында
Ҡайһыһы иң һәйбәте?

Шағирҙарға тыйнаҡлыҡтың
Ишеге ябылмаған.
Әйтте:
– Иң яҡшы шиғырым
Әлегә яҙылмаған.

Шиғыр тиеп йәшәне ул,
Үтте ут-ялҡын аша.
Инде бына ғүмеренең
Финишы яҡынлаша.

Юбилярға һорау биреү
Хәбәрсенең ғәҙәте:
– Шиғырҙарың араһында
Ҡайһыһы иң һәйбәте?

Йыры халыҡҡа күсһә лә
Тыйнаҡ ине ул һаман:
– Минең иң яҡшы шиғырым
Әлегә яҙылмаған.

Үлде шағир. Күмделәр ҙә
Йәлләп әйттеләр ахыр:
– Яҡшы шиғыр яҙа алмай
Донъяны ҡуйҙы, бахыр...

## Һүгенеүгә ҡаршы һүҙ

Ер йөҙөндә бар әле, бар,
Бик күп серҙәр асылаһы.
Әнә шуларҙың береһе –
Һүгенеүҙәр бациллаһы.

Әле ғалимдар ҙа белмәй,
Әллә нисек ярала ул.
Һүгенеүсе ауыҙынан
Грипп кеүек тарала ул.

Әнә берәүҙең ауыҙы
Шул вирустар менән тулы.
Һүгенә-һүгенә йөрөп ята,
Сир осороп уңлы-һуллы.

Шул бәндәнең һүгенеүе
Йоҡҡан хатта малдарына.
Ышанмайһың икән, тыңла,
Яҡын бар ҙа яндарына.

Тел ғалимы әйтте: “Эте
Өргән булып күренә, – ти.–
Ысынында иһә шулай
Эт телендә һүгенә,”– ти.



Бигерәк тә тауығына
Ауыл халҡы хайран ҡала:
Оялмай ҙа, көпә-көндөҙ
Юҡ һүҙ әйтеп кукәй һала.

Һарығына ни етмәгән,
Шул тауыҡтан ары китмәй,
Оят һүҙ әйтә башлай ҙа,
Ярай әле әйтеп бөтмәй.

Ә кәзәһе, һүгенә торғас,
Фәхишәне киткән үтеп:
“Мә-ә!” лә “Мә-ә!” тип бар кәтәүгә
Йөрөй үҙен тәҡдим итеп.

Был сир берүк урап уҙһын,
Ебәрмәһен телдең бәҫен.
Әйҙә, малдар һүгенә бирһен,
Тик кешеләр һүгенмәһен.

Ә мин сирҙән һис ҡурҡмайым,
Осраһа ла теге “ер бит”.
Миндә – иммунитет, шуға
Һүгенмәйем, едрит-кудрит...







**– Бер таныш психолог кәңәше менән һатып алдым.**
– Знакомый психолог порекомендовал купить.

Нажиә ИГЕҘЙӘНОВА

# "Уртаҡ ҡыуаныс"




Хикәйә

Фәйез машина һатып алды. Төшөндә түгел – өнөндә. Алтмышын артмаҡлағанда ғүмер буйы хыял иткән моратына иреште.

Ауылдың бер осонда сөскөрһәләр, икенсе осона ла ишетелә, тигәндәре дөрөҫ: уның өрәңы, ифрат ҡупшы еңел машина алыуы хаҡындағы хәбәр сәғәт эсендә һәр өйгә мәғлүм ине.

Иң тәүҙә Фәйездең уң яҡ күршеһе күренде.

– Афарин! Машинаң менән ҡотлайым! Шатлығың оҙаҡҡа етһен! – тип Сөнәғәт ҡапҡаны асыу менән ҡысҡырҙы.

– Рәхмәт! Шатлығым уртаҡ булһын! – Шәп кәйефле Фәйезең күршеһенең арҡаһына уҫлаптай усы менән ҡаҡҡылап ҡуйҙы.

– Ҡыуаныстарыңды уртаҡлашырыңа ышанам! – Сөнәғәт, аттыҡындай эре тештәрен күрһәтеп, һаһылданы.

Ул арала Фәйездең һул күршеһе Фәнәғәттең ҡарлыҡҡан тауышы ғыжылданы:

– Бәхетле бәндә һин, Фәйез, ниндәй машинаның руле ҡулыңда! Мин, ҡыутомшоҡ, бындай машина хаҡында уйларға ла йөрьәт итмәйем. Мәңге кеҫәләрем буш – әле лә елдәр уйнай. Ниме, кредитҡа керҙеңме?

– Көс барҙа яңы өй һалырмын тигән маяны тотондом. Әлегә иҫкеһендә йәшәһәләр, торараҡ, мал-тыуарҙы ишәйткәс, кирбестән төҙөрмөн тигән иҫәп бар.

– Һинең урыңда мин булһаммы... шатлыҡтан шартлар инем! Нисек сыҙайһыңдыр был ҡәҙәре ҡыуаныстарға!

– Ҡыуаныстар уртаҡ булһын! – Фәйез баяғы һүҙен ҡабатланы.

– Беҙ ҙә шулай тибеҙ! – Сөнәғәт менән Фәнәғәт Фәйездең һүҙҙәренә бик ҡәнәғәт ине.

– Ауыҙыңа бал да май, Фәйез ҡустым! Уртаҡлашҡан һайын ҡыуаныс-шатлыҡтар һис бөҫкәрмәй, һаман арта, һаман күбәйә! – Урам аша йәшәгән күршеһе, яңғыҙ ғүмер кисергән Минсырур әбей ни арала яндарына килеп еткән, быларҙың әңгәмәһен ишетеп, хәбәрҙең мәғәнәһенә төшөнөп алған.

– Рәхмәт, Минсырур апай, теләктәрең ҡабул булһын! – тип йылмайҙы Фәйез.

– Ихлас теләһәң, ҡабул булмай, ҡайҙа китһен! Күңелең киң һинең, Фәйез ҡустым. Миңә лә лифкауайыңа ултырырға Хоҙай насип итһен. Бәндә юл йөрөмәй тормай.

Ошолай һөйләшкән арала көтөү ҙә ҡайтты, әммә Фәйездәрҙең ихатаһынан кеше өҙөлмәне, эңер ҡуйыра башлаһа ла әҙәм аяғы баҫылманы. Кемдер, тел шартлатып, машина тирәләп йөрөнө, бәғзеләр йылтыр корпусын һыйпаны. Машинаның рулен борғолап, сигнал биреп маташыусылар ҙа бар ине.

Был көндө Фәйездең ғаиләһе йоҡларға бик һуң ятты.

– Нимә, ғүмерҙә машина күрмәгәндәй, барыһы бер юлы ябырылды, – Фәйездең ҡатыны, асыуын саҡ тыйып йөрөгән икән, ирен әрләргә тотондо. – Үткән аҙнала Кәли ҙә машина алды. Ҡайтып та керҙе, ҡапҡаһын шапылдатып бикләп тә ҡуйҙы. Һинең һымаҡ, ихатаһында күргәҙмә ойошторманы.

– Кәли ҡарундың күңеле тар – ҡыуаныстарын уртаҡлаша белмәй. Яп ауыҙыңды, ят, йоҡла! – тип тыйҙы Фәйез ҡатынын.

Ул хәләленең хәлен яҡшы аңлай. Кисерештәр өйөрмәһенән үҙенең дә күңеле иләҫ-миләҫ – йоҡоһо осто. Борғаланып, әйләнеп тә тулғанып, оҙаҡ ыҙаланғас ҡына серемгә китте...

– Тор, Фәйез, машинаңды ҡабыҙ, минең малай ғаиләһе менән Сорғоттан ҡайтып килә, станциянан барып алайыҡ! – Уң яҡ күршеһе Сөнәғәт һонтайып ишек төбөнә баҫҡайны.

– Хәҙер, тиҙ генә йылытып, берәй тәрилкә аш ашайым да... – Фәйез, йоҡоһонан арына алмай, мөңгөрләнә. Кисә оҙон көн ярһыуҙан тамағына аш үтмәгәс, быны әле бик асыҡҡанын тойҙо.

– Ярар, ашап торма, юлда ҡапҡыларбыҙ әле. Поезд килеп, көтөп йонсорҙар. – Сөнәғәт ҡабалана ине.

Станцияға иртәрәк тә килгәндәр икән – Сөнәғәт ваҡытты бутаған: киске сәғәт унды, иртәнге ун тип аңлаған. Исмаһам, тамаҡ ялғарлыҡ ашхана кеүек нәмәһе лә юҡ. Хәҙер ни, һалымы түләнмәгән банкрот, тип ябалар ҙа ҡуялар. Сәфәрҙәгеләр эңер тамам ҡуйырыуға ҡайтып керҙеләр.

– Шулай артабан да ҡыуаныстарҙы уртаҡлашып йәшәйек! – тип Сөнәғәт хушлашҡанда Фәйездең иңбашынан ҡаҡты.

Арманһыҙ арыған, сикһеҙ сарсаған Фәйез әллә күпме айран, хәтһеҙ тәгәс сәй эскәс, карауатына саҡ барып етте...

– Аһ-аһ, был ни хәл, битеңә ҡояш төшә бит, уян әле, Фәйез ҡустым! Ҡалаға барып ҡай-



тайыҡ. Һөт, май-ҡаймаҡ, эремсек һатырға уйланым әле. Унда, горыдта, ошо ризыҡтар йәһәт үтә, тиҙәр. Төшкә ҡайтып етербеҙ. – Караuat янында Минсырур ҡарсыҡ тора икән.

– Асыҡтырҙы... кисә сәй генә, айран ғына...

Фәйез хәбәрен һөйләп бөтә алманы, Минсырур ҡарсыҡ яман бартанданы:

– Миңә, бахырға, от ворот – поворот! – тип үк ебәрҙе ул, урыҫ һүҙҙәрен ап-асыҡ әйтеп. – Кисә һары таңдан Сөнәғәт менән стансаға елдән етеҙерәк елдерҙегеҙ...

Иламһыраған күршеһен йәлләп, Фәйез машинаһына табан йүнәлде.

– Төнө буйы әҙерләндем! – Минсырур ҡарсыҡ бихисап биҙрә-бидондарын, өс, биш литрлыҡ банкаларын машинаның багажнигы яғына теҙеп үк ҡуйғайны.

Былар ҙа ҡаланан кисләтеп кенә ҡайттылар. Ҡарсыҡтың шатлығы башынан ашҡайны. Бәй, шулай булмай ни – кеҫәләре тулы аҡса бит. Рәхмәт әйтергә лә онотоп, өйөнә туйтанланы. Фәйез буш һауыттарҙы әбейҙең соланына ташыны.

Өсөнсө көндө Фәнәғәттең эсе ауыртыуына сыҙамаған ҡатынын район шифаханаһына алып киттеләр. Төн уртаһында юлға сығыуҙары яҡшыға булды. "Ярты сәғәткә һуңлаһағыҙ, һуҡыр эсәге шартлар ине,"– тине табиптар.

Ҡыҫҡаһы, халыҡ Фәйездең машинаһына ифрат ҡыуанды: кемдең ҡайҙа, ҡасан барыры алдан әйтелде, хатта исемлектәр төҙөлдө.

Көн тимәй, төн тимәй, ямғыр йә буран тип тормай, ашар саҡта тамаҡ ялғарға ваҡыт тапмай, йә аяғөҫтө королай ғына икмәк көйшәп йөрөй торғас, Фәйез ашҡаҙан сиренә тарыны – ябыҡты, ҡаҡ һөйәккә ҡалды.

Етмәһә, "уртаҡ ҡыуаныс"ҡа әйләнгән машина сыҙаманы: бер-бер артлы әле теге, әле был нәмәһе ватыла торҙо.

Пенсиә генә етәме ни, тора-бара, Фәйездең машинаһын рәткә килтерергә һыйыры ла "инеп китте".

Ә бына яңыраҡ бер ауылдашын Өфө аэропортына алып барғанда, уның "самолетҡа һуңлайым, шәберәк ҡыу!" тигән һүҙен тыңлап, сәғәтенә йөҙ егерме километр менән елдергәндә... юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген һаҡлаусылар ҡулына эләккән. Штраф түләргә аҡсаһы булмағас, улар "уртаҡ ҡыуаныс"ты алып ҡалғандар. Фәйез мең бәлә менән – ҡайҙа ат арбаһына ултырып, ҡайҙа йәйәүләп – саҡ-саҡ ҡайтып йығылды ла айға яҡын ауырып ятты.

Фәйездең хәл-әхүәле хаҡында Серәште ауылы халҡы был юлы ла тиҙ ишетте. Тик Фәйездең ихатаһында ауылдаштары ниңәлер күренмәне...




**– Бөлгөнлөккә төштөк – көмөшкәне ҡайын һутынан ҡыуа башланыҡ!**

– Совсем докатились – самогонку гоним из берёзового сока!




**– Тыуған көнөң менән, хөрмәтле ҡәйнәм!**

– С днём рождения, уважаемая тёща!



## Өлгө

**Баш ҡаланың 42-се урта мәктәбе эргәһендә йәшәйем. Үҙем ғүмер буйы тәрбиәсе, уҡытыусы булып эшләгәс, уҡыусыларҙың, ата-әсәләрҙең көн итмешен йыш күҙәтергә тура килә.**

**Иртән әсәйҙәр кескәй балаларын мәктәпкә оҙата килә. Ҡайһылары бер ҡулына сабыйын етәкләгән, икенсе ҡулында – сигареты. Әсәһенең һаҫыҡ тәмәке төтөнөнә тонсоғоп барған бала шул сакта нимә уйлай икән, тиҙҙән мин дә үҫермен, рәхәтләнеп тәмәке көйрәтермен, типме икән?**

**Ахыры бер көндә матур ғына ханымға:**

**– Туғанҡайым, исмаһам, шул нәмәнде балаң янында тартмаһаң ине, – тинем. – Үҙеңде генә түгел, уны ла ағыулайһың бит.**

**– Ҡыҫылма, һинең эшең түгел! – тигән яуап ишеттем.**

**Бына шундай өлгө күрһәтә ҡайһы бер әсәйҙәр сабыйҙарына.**

**Мөхәммәт НУРМӨХӘМӘТОВ.**

## Ҡайҙа беҙҙең автобус?

*Ваҡытында «Өфө – Һәүәләй» маршруты буйынса йөрөгән автобус Һәүәләй, Ҡолош, Ҡабаҡ, Конезавод ауылы кешеләрен хеҙмәтләндерҙе. Тиҙҙән был маршрут «Өфө – Бельский»ға әйләнде лә беҙҙең «Икарус» урынына «Газель» йөрөй башланы.*

*Ул ғына ла түгел, көнөнә Өфөгә әсәр рейс йөрөгән автобус кала-ара маршруты булып һанала. Беҙ, пенсионерҙар, шул арҡала үҙебеҙҙең льготалы билеттарыбыҙ менән дә ҡуллана алмайбыҙ. Етмәһә, водитель ҡайһы ваҡыт билет та биреп тормай, ә биргәндәрҙән автобустан сыҡҡанда уларҙы кире тапшырырға ҡуша. Уныһы, әлбиттә, беҙҙең эш түгел, кем әйтмешләй, хозяин – барин.*

*«Өфө –Һәүәләй» маршруты ҡайҙа юғалды икән, һәнәк ағай, шуны ғына белге килә. Бәлки, беҙҙең хәлгә кереп, уны табышырһың?*

**Р. ТЕЛӘШЕВА, З. ДИНИСЛАМОВА.**





**А. АНДРЕЕВ**

– Йәнекәйем, оҙаҡламай һеҙҙең иң яратҡан байрамығыҙ етә, ҡыйбатлы ғына бүләк алайым тип ауыл мәғәзиненә ингәйнем, һиңә оҡшарлыҡ бер нәмә лә күрмәнем. Мәйтәм, әллә «Жигули» менән Өфөгә елдереп кенә барып ҡайтайым микән? – тип өндәште Шәрәф ҡатыны Зәлифәгә.

– Әлләсе, – тине ҡатыны йылмайып, – аҡсаның самалы сағы бит әле, бензин да ҡыйбатланды. Машинаңды йөрөтергә праваң да юҡ...

– Әй, машинаға булмаһа, матайға бар, уның праваһына “Кирйәнов Шәрәф”, тип яҙылған. Беҙҙең Мәскәү ауылында Кирйәновтарҙан башҡа кеше бармы!

– Юҡ-бар һөйләп баш ҡатырма, һин бит ауылдан ун саҡрым ары киткәнең юҡ. Йә берәй ҡазаға юлығырһың, Аллам һаҡлаһын, – тине Зәлифә, ирен ҡосаҡлап.

Шәрәф тәүге һүҙенән баш тартманы: иртәнге сәғәттә иҫке машинаһына ултырып, ҡалаға юлланды. Тик ауылды сығыу менән, хәүефһеҙлек ҡайышы эшләмәүен белде. Әммә Шәрәф аптырап торманы: ысҡынмаһын тип, ҡайышын бушлатына тегеп уҡ ҡуйҙы. Яңы закон буйынса, 500 һумды сәпәһәләр, китте барҙы бензинға тигән аҡсаң.

Ҡалаға етәрәк, Шәрәфте беренсе тикшереү пунктында уҡ туҡтаттылар. Йыуылмаған машина күҙҙәренә тиҙ салынғандыр инде. Выжлап үтеп киткән иномаркаларҙы уҙҙырып туктағас, Шәрәф бушлаты менән ҡайышты һалды ла:




## Ҡатын-ҡыҙға... төрттөрөп

✶Ҡатын-ҡыҙ ауына күберәк асыҡ ауыҙҙар эләгә.

✶Ҡатын-ҡыҙ – йә бәхеткә, йә хәсрәткә саҡырыу билеты.

✶Ҡатын-ҡыҙҙың кейенеүяһаныуын көтөү вокзалда һуңға ҡалған поезды көтөүҙән дә ауырыраҡ.

✶Йәш ҡатын картлыҡты еңеләйтә, йә, киреһенсә, картлыҡты яҡынайта.

✶Һәр сибәр сәркәтибәнең шәхси директоры була.

✶Үҙ-үҙенән көлә белгән ҡатын-ҡыҙ ысын ир-егеттән дә көслөрәк.

✶Ҡатының уҡлау тотоп ҡаршы алһа, сәғәткә ҡарап тороуҙың файҙаһы юҡ.

**Ғәбит САДИҠОВ.**

# Сослоҡ кәрәк!

**Юмореска**

– Әссәләмәғәләйкүм, иптәш капитан, – тип матай праваһы менән машина документтарын һуҙҙы.

– Мин һиңә ниндәй «капитан» булайым, мин – сержант, ошонда иң оло хужа! – тип ебәрҙе милиция сержанты.

–Үҙеңде тағы ла олораҡ иткем килде, ҡустым, ғәйепкә алма бер үк...

– Тә-ә-әк, Кирйәнов, Мәскәүҙән, ызначит, – тип һөйләнде үҙ алдына сержант.

– Эйе, Мәскәүҙән. Кирйәновтарҙы белмәгән кеше юҡтыр ул, – тине Шәрәф, көлөмһөрәп, тегенең күҙенә тура ҡарап.

– Ярай, һеҙгә хәйерле юл, – тип честь биреп, сержант тороп ҡалды.

«Булды, былай булғас, бында ла, күрәһең, беҙҙең ауылды беләләр»,– тип уйлап ҡуйҙы ла Шәрәф юлын дауам итте.

Бер ни ваҡыттан һуң әлеге сержант, КПП-ға инеп, рация аша алдағыларға хәбәр итә һалды:

– Ҡарағыҙ уны, иҫке «Жигули»ҙа, башына кәпәс кейгән, матай танытмаһы менән Мәскәүҙән спецзадание менән килгән тикшереүсе йөрөй. Ябай булып ҡылана ул, һеҙ туҡтатып тормағыҙ! Ҡара уны, нисек беҙҙе ултыртмаҡсы булалар, йәнәһе, беҙ төшөп ҡалғандарҙан... Һеҙҙең кеүек спецтарҙы беҙ күп күргән...

Бына шулай итеп, отҡор Шәрәф, бәлә-ҡазаһыҙ Өфөнөң супермаркеттарынан ҡатынына бүләк, бала-сағаға күстәнәстәр алып, ҡайтыу яғына юлланды. Теге КПП-ны уҙғанда, әллә ҡайҙан танып, баяғы сержант быға честь биреп ҡалмаһынмы.

– Танымай ҡара беҙҙәй егеттәрҙе! – тип уҙҙы уның янынан ауыҙы ҡолағына еткән абзыйыбыҙ.

Бүләк-күстәнәстәр тейәп, имен-һау ҡайтып ингән ирен күргәс, Зәлифәһе уны ҡосаҡлап үбеп үк алды.

– Мәскәүҙән килгәнде белгәс, ГИБДД сержанттары честь биреп кенә ҡаршылайҙар икән беҙҙе, Кирйәновтарҙы,– тип маҡтанып та алды Шәрәф. Рәсәйҙең ГИБДД начальнигы Кирьянов менән бер фамилиялы булыуын, ГАИ сержантының уны тикшереүсе тип алдағы постарға хәбәр еткереүен башына ла килтермәй ине ул, әлбиттә. Күршекүлән алдында уның абруйы бик ныҡ артып китте. Нисек артмаһын: Өфө саҡлы Өфөгә иҫке генә «Жигули»ҙа матай танытмаһы менән барып ҡайт әле! Сослоҡ кәрәк был кризис заманында!

**Дим ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

# АНТИБУР

(Булған хәл)

Мин үҙем Хәтимә тигән инәй булам. Хоҙай балалар насип итмәне, ҡартыҡайым бер нисә йыл элек вафат булып ҡуйҙы. Япа-яңғыҙ булһам да, һыйыр, ҡош-ҡорт аҫраған, баҡса үҫтергән булам.

Ауылда әлек тыныс, бер нәмәгә лә теймәйҙәр ине. Әле лә күбеһе үҙ көсө менән малтыуар үрсетеп, баҡса үҫтереп донъя көтә. Ә шулай ҙа кеше иҫәбенә йәшәгәндәр бар. Улар әллә ни күп тә түгел, бармаҡ менән генә һанарлыҡ, шулай ҙа әтлектәрен ҡылалар.

Яңғыҙ булһам да, яйлап баҡсаны ҡаҙып картуф, емеш-еләк, йәшелсә ултырттым.

Бер көндө эштән арып, татлы йоҡоға талғайным, ҡыштырлаған тауыш ишетеп уянып киттем. Баҡса яғына күҙ һалдым һәм саҡ тәгәрәп китмәнем: бурҙар рәхәтләнеп хужа булып йөрөйҙәр.

Ир кеше тоғона, һабағынан айырып, картуфты тултыра. Ҡатын кеше бигерәк шәп эшләй. Ныҡлап ҡарай торғас, кем икәндәрен таныным – яҡын ғына күршеләребеҙ икән.

Ни эшләргә? Милиция саҡыртыуҙан файҙа юҡ. “Әбей, йәшелсәнең хаҡы арзан бит, зыян ике меңгә лә тулмай, дело асып тормайбыҙ”, – тип әйткәндәрен белеп торам. Туҡта, былардан белдермәй генә үс алырға кәрәк. Уйланым да көҙ көнө баҡсаны сәнскеле тимер сыбыҡ менән кәртәләтеп алдым. Ҡапҡаны тимер йоҙаҡ менән бикләп ҡуйҙым. Бер китап һатып алдым, шуны уҡып, һәйбәт сортлы “роза” таптым, сәнскеһе эре, үҙе лә ҙур ҡыуаҡ булып үҫә икән. Алдағы йыл бурҙар – фик керерҙәр!

Ҡыш көнө өйҙә тәҙрә төбөндә үҫә торған сортлы помидор һәм ҡыяр орлоғо яҙҙыртып алдым. Кишер, сөгөлдөр орлоғонан да үҙемә оҡшағандарын, ә картуфтың иртә өлгөрә торған сорттарын яҙ башында уҡ баҙарҙан







А. САЙРАНОВ, А. ӘНҮӘРОВ, М. ХӨРМӘТОВ һүрәттәре.



һатып алдым. Еләк-емеш һәм башҡа йәшелсәләрҙе лә яңы ысул менән ултыртып тәрбиәләргә булдым. Һуған менән һарымһаҡҡа түтәл яһап торманым, бары “роза”лар төбөнә кәрәгенсә төртөп сыҡтым. Сөгөлдөр менән кишерҙе ҡыйлыраҡ урынға ултырттым.

Июнь аҙағы картуфты ҡаҙып та алдым, йоҙроҡ хәтле булып үҫте, һәйбәт сорт икән. Иртә ҡаҙып алғас, урыны ҡап-ҡара булып ятты.

Теге ике күрше бер көн “разведкаға” килеп инделәр. Үҙҙәренең ике күҙе баҡсала. Ире һүҙ башлай:

– Хәтимә апай! Әллә быйыл картуф сәсмәнеңме, һәр йыл да баҡсаңда матур уңа торғайны, – тигән була был.

– Сәскәйнем дә ул, какрас жукка дарыу һипкәндә ауырып яттым, картуфтың япрағын тотош жук ашап бөттө, – тинем, – ә һабағына тағы әллә ниндәй ҡорт төштө. Бик насар ҡорт икән. Уға дарыу бар икән, әдрисен әйттеләр ҡайҙан яҙҙырып алырға. Шул дарыуҙы алып һиптерәм. Ул дарыу көслө, дүрт-биш йыл картуфты ашарға ярамай, тинеләр. Ныҡлап йыуһаң, малға ашатырға ярай, тинеләр. Ерҙе буш ятҡырып булмай, малға булһа ла үҫтереп ҡалырмын инде, ә үҙемә ашарға һатып алырмын әле.

Бисәһе һүҙгә ҡушылды:

– Хәтимә апай! Әлек ҡайһылай йәшелсәләрең ныҡ уңа ине, ә быйыл баҡсаңды ҡалай ҡый баҫҡан. Үҙең ауырынҡырап торғас, беҙгә әйтергә кәрәк ине. Әйҙә беҙ йәһәт кенә утап сығайыҡ.

Мин дә һыр бирмәнем:

– Мин яңы ысул менән үҫтерә башланым баҡсаны, исеме “антибур” тип атала. Ҡыйҙы бит специально ҡалдырҙым. Ҡайһылыр ҡоштар йәшелсә-емеш-еләк ашап аптырата, ә ҡыйы күп булһа, күҙҙәре күрмәй икән. Һеҙ бит йәштәр, ҡыйһыҙ итеп үҙегеҙ сәсеп үҫтерегеҙ, – тигәс, шым ғына сығып киттеләр.

Аллаға шөкөр байтаҡ йылдар үтте, йомош һорап та, “төнгө ҡунаҡ” булып та ингәндәре юҡ. Әллә икенсе баҡсаларға эйәләштеләрме икән?

Ике йыл ошо “яңы ысул” менән үҫтерҙем баҡсаны, бераүҙең дә төшкәне булманы. Хәҙер баҡсаның яртыһын “иҫке ысул” менән үҫтерәм. Бурҙарҙы һемәйтеү өсөн, ысулдарҙы үҙгәртеп торорға кәрәк. Бәлки, киләһе йыл сәпсим яңы ысул уйлап тапһам, тәжрибәм менән уртаҡлашырмын.

**Гөлшат ҠАРАНАЕВА.**
Көйөргәҙе районы.

## Сәйер сауҙа серҙәре




# Салют!

**– Салют!**

**– Ур-ра-а!**

**Салют биреү өсөн мотлаҡ Еңеү байрамын йәки башҡа тантаналарҙы көтөү кәрәкмәй икән дә. Әнә, баш ҡаланың Совет районындағы 279-сы «Салют-торг» магазины хеҙмәткәрҙәренә әйләнгән һайын салют бирергә форсаты сығып ҡына тора. Ҡаптарға теге йәки был аҙыҡ-түлекте кәрәгенән кәмерәк тултыраһың.**

**– Салют!**

**Шунан апаруҡ ҡына ҡыштырҙаҡтар сос ағай-апайҙарыңдың кеҫәһенә инеп ята.**

**– Салют!**

**Аҡмаһа ла тамып тора.**

**– Салют!**

**Йәшәй белергә кәрәк.**

**– Салют!**

**Ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау һәм кеше именлеге өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы тикшереүселәре килгәндә лә улар салют бирергә әҙерләнеп йөрөгән. Ҡаптарға һалынып, кәштәләргә ҡуйылған мандарин, тауыҡ боттары, әфлисундың ауырлығы ярлығындағы яҙыуҙан кәмерәк булыуы асыҡлана.**

**Шымарған һатыусылар ҡулланыу ваҡыты сығып, инде күгәрә башлаған «Уфимский», «Чесночная», «Краковская» колбасаларын, 26 дана «Чудо» сырын да салют итергә йыйынған.**

**Тиҙҙән магазин етәксеһенең үҙенең хөрмәтенә лә салют атылды. Уға 5500 һум күләмендә штраф һалынды.**

**В. ҒАФУРОВ.**

**А. ВАСИЛОВ**






Үҙгәрә донъя. Һиҙҙермәй генә түгел, күҙгә күренеп үҙгәрә. Ҡарһыҙ ҡыштарға ғына күҙ ташлайыҡ.

Ярай әле былдай хәлдәр элегерәк күҙәтелмәгән. Ул сағында ауылдағы бөтә хәрәкәт, юл йөрөүҙәр өҙөлөр, почта, элемтә хеҙмәттәре көрсөккә терәлер ине. Ни сана табаны шыуырлыҡ, ни арба тәгәрмәсе тәгәрәрлек түгел.

Яңы йыл шыршыһы эргәһенә Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу өсөн ҡар табып булмай. Бер йылды урамдарҙағы булыр-булмаҫ ҡарҙы ҡырып-һеперep йыйғайнылар. Ярай ҙа ул Мәскәүгә ҡарҙы, вагондарға тейәп, Кемерово өлкәһенән килтергәндәр.

Һеперeп тигәндәй, ғүмере буйы гидрометүҙәк станцияһында эшләгән Һәкбәк Әкбәровты пенсияға сығырға бер йыл ҡалғас эшенән бушаттылар. Сәбәбе: һуңғы йылдарҙа эшенә һалҡын ҡараған, һауа торошо хаҡында дөрөҫ мәғлүмәттәр бирмәгән.

Эшһеҙлек хөкөм һөргән осорҙа ҡайҙа барып бәрелергә тейеш Һәкбәк? Башҡа һөнәре лә юҡ. Ярай әле бер эшҡыуарҙың офисы тирәһен, маши-

## Без капсыкта ятмай

# ШӘФҠӘТЛЕЛЕК

Өфө районының Зубов ауылында йәшәүсе Ләбибә Хәйруллина кешеләргә ярҙам итергә үлеп бара. Уның тағы бер күркәм сифаты бар – ҡылған изгелеге тураһында һөрән һалып йөрөмәй. Һе, изгелек эшлә лә, аҙаҡ шуны, мин фәлән-фәләнгә ярҙам иттем, тип бөтә донъяға яр һалып йөрө, имеш. Был бит әҙәпһеҙлектең иң олоһо! Халҡыбыҙҙа берберенә ҡарата мәрхәмәтле булыу, мохтаждарҙы ҡыуандырыу әүәл-әүәлдән сауаплы эш һанала. Улайға ҡалһа, Ләбибә апайығыҙ ҙа әҙ эшләнеме! Тегеһенә был кәрәк, анауға шул етешмәй тип сабыулай торғас, аяҡтары кейеҙләнеп бөтә яҙҙы бит. Әммә был хаҡта зарланып йәки ҡупырайып берәйһенә ауыҙ асып һүҙ әйтһәсе! Ҡыҫҡаһы, тыйнаҡлыҡ та, инсафлыҡ та хас үҙенә. Шуға ла үҙен күптәр таный, бәғзеләре уның шәфҡәтлелеге тураһында ишеткәне бар. Нисәмә кешегә яҡшылыҡ эшләгән изге йәнде кем белмәһен инде!

Бөгөн арабыҙҙа үҙ мөйөшөн булдырырға теләүселәр бихисап. Хөкүмәтебеҙ төрлө программалар ҡабул итеп, мөмкин ҡәҙәр уларҙың хәлен еңеләйтергә тырышһа ла, барыһы ла тиҙ арала ғына бәхетле булырға оҡшамаған. Ярай әле юҡ-юҡ та Ләбибә Фәнәүи ҡыҙы кеүек изге йөрәкле ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ осрап тора. Фатирһыҙ йәки бәләкәй генә мөйөштә ыҙа сиккәндәрҙең яфаланғанын күреп белә тороп, нисек инде ситтә битараф ҡалмаҡ кәрәк?

Иң тәүҙә ул танышы Г. Хажиеваны бәхетле итергә теләне.

– Теләһәң, эхирәткәйем, үҙеңә анһат ҡына фатир алып бирәм, – тине ул, матур йылмайып.

– Нисек? – Көтөлмәгән тәкдимдән Хажиева ҡыуанып китә.

– Өфөнөң район хакимиәттәрендә бик ышанысլы таныштарым бар. Улар ярҙамында үҙеңде берәй иҫке йортҡа фатирға теркәйбеҙ ҙә, бер нисә айҙан уны емерһәләр, бына тигән ике бүлмәле фатирҙа ултыраcаҡһың.

Әлбиттә, шатланып риза була Хажиева һәм 50 мең һум аҡсаһын сығарып та бирә.

Бер аҙҙан Ләбибә ханым Хажиева янына килеп, йәнә аҡса алып китә.

Инде бер нисә кешене «фатирлы итеп», уларҙың рәхмәтенә ҡойоноп, күңеле булған ханым И. Ғарифуллин менән таныша.

– Баш ҡалалағы иң арыу кешеләр йәшәгән Көньяҡ микрорайонынан фатир алғың киләме? Миллион ярым һум аҡса тапһаң, бөтәһе лә майлаған кеүек булыр. Һине бик важный исемлеккә индерәбеҙ. Ә теүәл бер айҙан ҡулыңа асҡыс тотторасаҡтар.

Кемдең рәхәт кенә фатирлы булғыһы килмәһен инде!

Бер аҙҙан Ғарифуллин, әсәһенең паспортына йәшәгән урынынан прописканан төшөрөү тураһында мисәт ҡуйҙыртып, документтар тултырыр өсөн, Ләбибә Хәйруллинаға тапшыра.

Баҡтиһәң, шәфҡәтле ҡатындың ярҙамына мохтаждар бөрәү-икәү генә түгел

# Ҡар ҡытлығы

Мансаф ҒИЛӘЖЕВ

**(Булған хәл)**

налар ҡуйыла торған ихатаһын тәртиптә тотоу, бигерәк тә ҡышҡы айҙарҙа ҡарҙан таҙартыу мәшәҡәте ҡалҡып сыҡты. Беҙҙеңсә, урам һепереүсе инде.

Әммә Әкбәровҡа эш хаҡын түләргә уйлаусы ла юҡ. Улай ғынамы, өс дворниктың икәүһен ҡыҫҡарттылар. Һәкбәк:

– Ноябрь, декабрь, ғинуар, февраль айҙарына эш хаҡы ҡайҙа? – тип ризаһыҙлығын белдерә башлағайны, яңы бай уны әрләп ташланы:

– Оялмайынса ниндәй аҡса һорайһың?! Хет берәй ус ҡар алып ташланыңмы оҙон ҡыш буйы, ә? Юҡмы? Шулай икән, аҡса ла юҡ. Мин колхоз рәйесе түгел. Колхозда ғына кеше эшләмәһә лә, хеҙмәт көнөн алып ятҡан, ти. Ул заманалар күптән үтте, абзый. Тәүҙә эш күрһәт, һуңынан һөйләшербеҙ.

– Юҡ ҡарҙы нисек күрәйем һуң?

– Аҡса эшләйһең килһә, яуҙыр, буран күтәр.

– Башымдан көлгәнең өсөн хөкөмгә тарттырасаҡмын!

– Ихтыярың.

Икенсе көндә үк Әкбәровтың ҡулына приказ тотторҙолар. Томанлана төшкән күҙҙәренә түбәндәге һүҙҙәр салынды: “2008 – 2009 йылдарҙың ҡышында ҡар ҡытлығына йәғни кризисҡа әләгеү сәбәпле, дворник Һ.Әкбәровты ҡыҫҡартырға».

Асыуынан ни эшләргә белмәгән Һәкбәк фанерҙан эшләнгән киң көрәген асфальтҡа атып бәрҙе. Шуны ғына көткәндәй, шефының именлеген һаҡлаусы атылып килеп етте.

– Штраф! Түлә кәрәк хаҡын!

– Мин – күрсәктә, господин-тауариш, – тип, һөҙөргә әҙерләнгән үгеҙҙе хәтерләткән егеттән шөрләп, Әкбәров урам буйлап йүгерҙе.

Уны ҡыуып тотоу өсөн шунда уҡ киң тәгәрмәсле, ялтыр ҡара төҫтәге сит ил автомобиле ҡуҙғалды.

---

икән. Кешеләргә изгелектәр ҡылыр өсөн генә яратылған Хәйруллинаның татлы һүҙҙәрен ишетеү Воробьев, Семенов, Никитин, Богданов өсөн күктән төшкән бәхеткә әүерелә. Кеме булыр-булмаҫ аҡсаһын ҡырып-һепереп, кеме таныш-тоноштарынан үтескә алып тора. Берәүҙәре анһат ҡына фатирлы булыу, икенселәре тиҙ генә табыш алыу, сереп байыу ниәтенән. Әммә, ҡәһәрең, Хәйруллинаның хәтер тигәне бик шәптән түгел икән. Аҡсаны ҡулға төшөрөү менән уларҙың хужалары ла, фатирлы итеү вәғәҙәһе лә ҙа онотола.

Шул рәүешле киң йөрәкле ҡатын байтаҡ кешеләрҙе “мөйөшлө” итә. Әммә был турала берәүгә лә ҡыҫҡырып, лаф ороп йөрөмәй. Һис килешмәгәнде. Әллә нимә уйлауҙары бар. Беҙ ҡапсыҡта ятмаған кеүек, бындай шәфҡәтлелекте лә йәшереп булмай икән шул. Берҙән-бер көндә милиционерҙар Хәйруллина тураһында ишетеп ҡала...

Шәфҡәтлелек хаҡы йылғыр ханымға ҡимматҡа төшмәгәйе.

**Э. ӘХМӘҘУЛЛИНА,**
Өфө районы прокуроры урынбаҫары.
**В. ХАҠОВ.**









# Төкөрә ул кризисҡа!

“Кризис” һүҙенән ябай халыҡ ныҡ ҡурҡып йәшәй. Ҡурҡмай ни хәл итһен: көн дә телевизорҙан шуны тылҡыйҙар ҙаһа. Ҡала кешеләре тегенеһен-быныһын тоҡлап ташый. Лима апай ҙа бер тоҡ “рожки”ҙы көс-хәлгә өйөнә алып ҡайтты. Бөтә буш банкаларҙы “рожки” менән тултырып, ҡалғанын ҡайҙа бушатырға белмәй алйып бөттө. Ике биҙрәһе бар ине уларын да тултырҙы. Хәҙер ҡайһы тартмаһын асһа ла шул “рожки”ҙары килә лә сыға. Хәйер, запаслы булыуға ни етә. Элек тоҙ, һабын, бәҙрәф ҡағыҙҙарын күпләп һатып алғайны. Хәҙер рәхәтләнеп шуларҙы тотона.

Яңыраҡ Лима эргәләге магазинға ингәйне. Яңы йылға хәтле һығылып торған кәштәләр бушап ҡалған. Ҡайҙан килеп сыҡты был кризис тигән нәмә? Хаҡтарҙың артыуына ла күнегеп кенә бөткәндә тағы быныһы бәкәлгә һуға. Эш хаҡтары әҙ генә артыу ҙа күңелдәрҙе күтәреп ебәрә торғайны. Юҡ, тота ла яңы нәмә уйлап сығаралар шул. Тыныс ҡына, рәхәтләнеп йәшәргә мөмкинселек бирмәйҙәр: әллә донъя ғәләмәттәре, әллә үҙебеҙҙең хужаларҙың баштары етмәүҙән килеп сыға.

“Рожки”ҙарын Лима маҡтаһа ла, улар, моғайын, оҙаҡҡа етмәç, бөтәр. “Рожки”ҙарҙан алдараҡ кризис тигәндәре бөтһә икән дә бит, әлегә осо-ҡырыйы күренмәй шул. Эй, ниңә юҡҡа ҡайғырырға! “Кризис” тип һөйләй башлаһалар, Лима ауыр йылдарҙа үҙҙәре яғында йырланған бер таҡмаҡты иҫенә төшөрә:

Әле бөтә онобоҙ,  
Әле бөтә тоҙобоҙ.  
Бөтһә-бөтһән, как-нибудь  
Бирешмәйбеҙ – торорбоҙ!

Вот тәк! Ҡурҡытырһың күпте күргән, күпте кисергән Лима кеүек ҡатын-ҡыҙҙы! Төкөрә ул кризисына!

**Л. САЙРАНОВА.**  
Өфө ҡалаһы.

Кисә киске сәғәт ун ике тулғанға тиклем минән дә бәхетле кеше булмаған икән. Дә-ә-ә, ысынлап та. Эшкә барҙым, ҡайттым... Һыуытҡысҡа бисәкәйем әүәлгесә записка сәпәгән: “Күҙерлем, киске аш плитә өҫтөндә, мин үҙемдең яратҡан сериалымды ҡарайым. Расчётыңды кофе һауытына һал – уң мең булһа, артығы кәрәкмәй...” Бына ул өйләнгәндән алып шулай яҙа. “Артығы” тигәне, йөҙ илле һум да етмеш биш тин була инде.

Бисә ҡалдырған күрһәтмәләрҙе үтәп, ниһайәт, телевизор ҡаршыһындағы диванға – бисәкәйҙең аяҡ осона сығып ултырҙым.

– Бынау, Татьянаны әйтәм, – тип башланы ул һүҙен. – Кеше шул тиклем дә иҫәр була икән.

– Ҡаршыла йәшәгән Василийҙың ҡыҙын әйтәһеңме? – тип һораным, һүҙенең мәғәнәһенә төшөнмәйерәк.

– Туң баш, ниндәй Василийҙың ҡыҙы булһын, ти! Разбежкинаны әйтәм! – тип күҙен аҡайтып ҡараны был.

– Беренсе этаждағы Таняның фамилияһын ҡайҙан

## Ишетмәһәң – ишет!

# УҒРЫ



*– Ишеттеңме бер хәбәр?*  
*– Юҡсы!*  
*– Ишетмәһәң – ишет! Баш каланың Чернышевский урамында теш дауалау поликлиникаһы бар, имеш.*

*– Әйттең һүҙ! Ундай поликлиника бөтә ерҙә булыр инде.*

*– Шулайын шулай. Әммә был поликлиниканың Ринат Әҙһәмов атлы хеҙмәткәре бар, ти.*

*– Ҡыҙыҡ кеше инде һин, әй. Һуң, поликлиника булғас, хеҙмәткәрҙәре лә булырға тейештер бит.*

*– Шулайын шулай. Бер көндө уға акса кәрәк була.*

*– Әйттең һүҙ! Акса бөтә кешегә лә кәрәк инде, унһыҙ бөгөнгө заманда бер аҙым да атлап булмай.*

*– Шулайын шулай. Әммә уны нисек табаһың бит әле. Ринат бер көндө поликлиника бинаһында урынлашкан аптека киоскыһының витрина менән тұшәм араһындағы ярыҡ аша эскә үтеп, кассанан биш мең һум аксаға айыу майы һөртә.*

*– Йә Хоҙай, карауылсы-фәлән булмағандыр инде.*

*– Бөтә хикмәт тә шунда шул. Был поликлиниканың һаксыһы Ринат Әҙһәмов үҙе, имеш!*

*– Бәй, үҙе һаклайһы урынға үҙе урлашып йөрөгәнме ни? Бынағайыш, ишетмәһәң – ишет! Кәзәне кәбеҫтә баксаһына ебәргән кеүек була инде был.*

**ИШҒӘЛЕ менән ҠУШҒӘЛЕ.**

Миләүшә ҒӘЙФУЛЛИНА

# Ғаилә ғилләһе



Юмореска

белəйем? – тинем мин дə, асыуланып.

Был һүҙҙәрем бисәкәйҙе сығырынан сығарҙы:

– Кит, маҙама төйеп ултырма! – тине лә уңайлы ғына урынлашҡан урынымдан типкесләп иҙәнгә төшөрҙө.

– Һин дә шул Разбежкинанан бер ерең менән дә кәм түгелһең! Уның хет Рыбкиналары бар, бер ерҙә лә эшләмәй, өҫтәл артында ашап ултырып ҡына тегенең проблемаларын ҡайғырта. Ә һинең минән башҡа кемең бар, ә?

Бәхәсләшеп ултырырға хәл дә, теләк тә юк. Янда ятҡан бисәкәйҙең йомшаҡ бесәй башлы тәпешкәһенә башымды терәгәйнем, ойоған да киткәнмен. Төшөмдә күршем Василийҙы күрҙем. Теге миңә, һинең өс балаңдың да атаһы мин, ышанмаһаң, әйҙә, ДНК-ға анализдар биреп иҫбатлайбыҙ, ти бит был. Бирермен мин һиңә анализдар, тип тегене бәреп ебәрәйем тигәндә генә бисәкәй, ҡабырғама тибеп:

– Тор, аяҡ аҫтында эт һымаҡ ятаһың, саҡ эләгеп йығылманым даһа! – тиеүенә уянып киттем бер саҡ.

Төшөм тыңғылыҡ бирмәне бит, әй. Уйланырлыҡ урын бар шул. Мин иртән китәм, кис ҡайтам. Ә бисәкәйҙең эшләйме, юҡмы икәнен дә аныҡ ҡына әйтә алмайым. Иртән иҙрәп йоҡлап ҡала, кис ҡайтҡанымда ул инде телевизор ҡаршыһында ултыра. Бындай мәлендә, яңылыштан һүҙ ысҡындырып, сериялынан бүлә күрмә. Ул саҡта!.. Дөрөҫөн генә әйткәндә, һуңғы тапҡыр ҡасан күҙгә-күҙ ҡарашып, һөйләшеп сәй эскәнде лә хәтерләмәйем.

Ошо хәлдәрҙән һуң да, икенсе көндө лә йүгереп тура өйгә ҡайттым. Подъезд ишеген асып өлгөрмәнем, күршем эстән нимәләр көйләй-көйләй, буш сеткаһын ҡулында өйөрөлдөрөп, бик ҡәнәғәт йөҙ менән минең күҙҙәремә серле генә ҡарап ҡулын биреп күреште лә, важный ғына баҫып, магазинға табан йүнәлде.

“Был ниңә көпә-көндөҙ өйҙә?.. Бисәкәй менән һөйләшергә, айырылышырға әҙер булыуыңды әйтергә кәрәк”. Шулай уйлап өйгә инеүгә, танауға тәмле аш еҫе бәрелде. Эске бүлмәнән бисәкәйҙең:

– Аллаға шөкөр, беҙҙең дә бергә ултырып ашар көн бар икән, – тигән йылы тауышын ишеткәс, баштағы бөтә насар уйҙар кинәт кенә юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы. “Аш алды”-на һалып биргәс, бөтөнләй таралдым да төштөм.

Хәҙер һәр көн эштән һуң уңғаһулға боролмай, тура өйгә – сериялдар ҡарарға йүгереп ҡайтам. Тормошом бөтөнләй икенсе йүнәлеш алды ла ҡуйҙы, рәхмәт төшкөрө. Был донъяның йәнә бер ябай ғына ғилләһенә инандым: бәхет сере беҙҙең үҙебеҙҙә икән!




**– Ике килограмм бриллиант үлсәгеҙ!**

– Взвесьте два килограмма бриллиантов!

# Ҡатын-ҡыҙҙар ҡәләме

## Ир-аттар – буйҙаҡтар



Ҡоштар кеүек ситтән ҡайтты,
Ауылыма ике буйҙаҡ.
Тартты микән тыуған яҡтар,
Ҡайтмағандар ине оҙаҡ.

Ғәли эштән ҡыҫҡартылғас,
Ҡыуып сығарғас ҡатыны,
Донъянан йәм эҙләй-эҙләй,
Күпме михнәттәр татыны.

“Ҡамыт кейергә иртә”– тип, –
Өйләнмәйсә йөрөй Сәмей.
Имеш, иртә өйләнгәндең
Ирлек һәләтлеге кәмей.

Ғүмәр әйтә: “Аҡса йыйһам,
Импортный машина алам,
Дүрт бүлмәле өй ҙә һалһам,
Шунан, бәлки, кәләш алам...”

Ике ҡатлы йортта Заман,
Яңғыҙ донъя көтә һаман,
Кәләш алмай ниңәлер ул,
Бисәләрҙән ҡурҡа яман.

Ә Зөфәр зарлана тағы:
“Ғәлиәне алһам, уңмам,
Нәсимәһе артыҡ йыуан,
Бер матур ҡыҙ юҡ бит уңған.”

“Мин кәләш тә алыр инем,
Эшҡыуарлыҡ алға бармай,
Ярай әле әсәй ҡарай”, –
Тип уфтана күрше Рамай.

Ҡай берәүҙәр, аңһат уйлап,
Эскелектә башы күптән.
Үгеҙ үлһә, ит булыр, тип
Аҙыҡ эҙләй улар сүптән.

Төрлө хәлдә һәм төрлөсә
Ниҙер ҡылып, ниҙер уйлап,
Йөрөп ята төрлө хәлдә
Ауылымда утыҙ буйҙаҡ.

Сисергә был мәсьәләне
Табылырмы берәй сара?
Тыумай ҡала күпме бала,
Был ауылдар ҡайҙа бара?

**Рәйлә НӘҘЕРҒОЛОВА.**
Стәрлетамаҡ ҡалаһы.

---

## Йәшәһен үҙ ҡатының!

Ғүмер буйы ҡыҙа инем
Ике бисәле иргә.
Шуны өндәремдә күреп,
Тәүбә иттем ғүмергә.

Бер аҙнаға, ҡатынымдың
Әхирәте килде бит.
Ә мин, йүләр, әй шатландым,
Ике бисә булды, тип.

Иртә таңдан торғоҙалар,
Кибеткә йүгертәләр.
“Беҙгә сәскә кәрәк!”– тиҙәр,
Йә сүп-сар түктерәләр.

Береһенә икмәк булһа,
Икенсегә торт кәрәк.
“Ауыҙың асып йөрөмә, –
Тип ҡыуалар, – бул зирәк!”

Мунса яғырға ҡушалар,
Шишмә һыуы һорайҙар.



Сәйҙәренә һөт һалалар,
Миңә бер ни һалмайҙар.

Үҙҙәре бергә яталар,
Көн-төн маска яһайҙар.
Ваннаны әҙерләп бирһәң,
“Шампанский” даулайҙар.

“Дуҫтыҡайым, аңла!”– тиеп,
Танышҡа шылтыраттым.

Ҡотолоу юлы табылғас,
Иртәнән сығып ҡастым.

Бер аҙна етте аңларға:
Үҙ иңемдә татыным.
Ике бисә – тамуҡ уты,
Йәшәһен бер ҡатының!

**Флүрә ХӘЗИЕВА.**
Салауат ҡалаһы.



Софья КИЯШКО

# Шаҡмаҡлы донъя



Һинең тормош хәтерләтә
Ҙур бер шахмат таҡтаһын:
Бүлмәңә – алты шаҡмаҡҡа
Үҙ-үҙеңде япҡанһың.



Яҡты донъяға ҡарайһың
Ҡылып сит бер тамаша:
Тәҙ(е)рә шаҡмағы менән
Экран шаҡмағы аша.

Экран шаҡмағы янынан
Күсәһең һин диванға:
Шаҡмаҡлы гәзит-журналдар
Ҡулдарыңдан шыуып төшә
Шаҡмаҡ-шаҡмаҡ иҙәнгә.



Хистәрең дә – кирбес-кирбес:
Аптырама, шаҡ ҡатма...
Ләкин күпме тырышма һин –
Донъя һыймай шаҡмаҡҡа.

***

Яҙмышынан күптәр риза түгел:
Байлыҡ етмәй, һаулыҡ, аҡса, дан...
Тик ниңәлер бер ҙә ишетелмәй
Аҡыл етмәүенә зарланған.

**Фатима ҒӘЛИЕВА.**
Күмертау ҡалаһы.

# Имеш, барын да белә



Түрәләргә ярайым тип,
Һөрән һалып ҡысҡыра.
Киҫәм тиеп, боҙоп ҡуя,
Тота белмәй быҫҡы ла.

Аҡты ҡара тиергә лә,
Ул һорамай кешенән.
Шундайҙарҙан был заманда
Күптән йөндәр өшөгән.

**Фәниә ХӘСӘНОВА.**
Ауырғазы районы.






*Рәсәй Гуманитар фәндәр академияһы академигы,
Салауат Юлаев исемендәге республика дәүләт
премияһы лауреаты Әхмәт Сөләймәновка – 70 йәш*

# Умартасы



**Тарих төпкөлөнән, күңелдәрҙән
Бал ҡортондай көн-төн тәм йыйҙың.
Аҡҡа төрөп, таты-төҫө менән,
Күңелдәргә ҡабат тамыҙҙың.**

**Асып һалдың – ниндәй бай һәм серле
Халҡыбыҙҙың рухи йыһаны.
Күпме һыйған сәнғәт хазинаһы,
Бергә ҡушып мираҫ-йоланы!**

**Кеше күңеле – баллы ҙур умарта,
Булһа оҫта умартасыһы.
Һин шундайһың – милләтебеҙ улы,
Илен ҙурлар ир-ат аҫылы!**



**Р. МИФТАХОВ.**




**– Ә Ҡарға ҡайҙа?**
**– Ул бит кибетен миңә һатты.**
– А где же Ворона?
– Она продала свой киоск мне.

# Карттар ҡаңғырыша

Хәйбулла ағай йоҡонан торғас, радио эргәһенә килеп ултыра ла, көндәр буйы төрлө хәбәрҙәр тыңлай. Бигерәк тә нисек дауаланырға кәңәштәрҙе көтөп ала, сөнки, уның аяҡтары һыҙлай, сатанлап ике таяҡ менән генә йөрөй ул. Ә бына “Уфакредит” көндәр буйы радионан аҡса һалырға саҡыра. Илле процентҡа аҡсағыҙҙы арттыртып бирәбеҙ, тиҙәр.

Бер көндө Хәйбулла ағай “процент” тигән һүҙҙе аңламағас, тышта ултырған ҡарттар эргәһенә сығып уның күпме булыуын һорашты. Ҡарттар күпме аңлатһалар ҙа, Хәйбулла ағай бер ни төшөнмәне. Аранан береһе: “Бына һин “Уфакредит”ҡа бер һарыҡ бирҙең ти, бер йыл үткәс, һарыҡ ярым, йәки бәрәсе менән бирәсәктәр, тип аңлатҡас, үлемтеккә йыйған аҡсамды илтеп һалырғамы икән әллә, тип уйға ҡалды.

Үҙ-ара кәңәшләшә-бәхәсләшә торғас, ҡарттар саҙаҡамды мулыраҡ бирерҙәр, тигән хыял менән, үлемтек аҡсаларын алып, Хәйбулла ағайға эйәрҙеләр. Унда уларҙы бик йылы ҡаршы алғас, аҡсаларын банкыла ҡалдырып ҡайтып киттеләр.

Алты ай үткәс, ҡарттарҙы банкыға саҡырып алдылар. Бында ҡайһы сатан, ҡайһы сулаҡ, ҡайһы бөтөнләй бөгөлөп төшкән насар кейенгән ярлы ҡарттар бик күп булып сыҡты. Йыйылышта бик оҙаҡ ниҙер һөйләһәләр ҙә, Хәйбулла бер нимә лә аңламаны. Һуңынанараҡ пакетҡа төрөлгән тары ярмаһы бирҙеләр. Тик Хәйбулла, аяғы йүнле йөрөмәгәс, абынып йығылып китте лә ярмаһының яртыһын иҙәнгә түкте. Ни эшләһен, йыйып алырға тура килде. Бер йыл үткәс килерһегеҙ, тип ҡарттарҙы ҡайтарып ебәрҙеләр.

Улар түҙемһеҙлек менән йыл үткәнен көтөп алдылар. Йыл

үтте – ҡарттар шатланышып “Уфакредит”ҡа килделәр. Тик бында, “аҡсағыҙ янды”, тип кенә ҡуйҙылар. Ҡарттар, аҡса яна тиме ни, тип аптыраштылар? Хәйбулла: “Ниңә янғын һүндереүселәрҙе саҡырманығыҙ?” – тип һораны. Банк хеҙмәткәрҙәре “банкрот” һүҙе менән аңлатҡас, Хайбулла ағайыбыҙ “банкрот” нәмә булыуын аңлатыуҙы һораны.

Шулай итеп, ҡарттарҙың үлемтек аҡсаларын банк йомдо ла ҡуйҙы. Ҡарттар аптырашып, нишләп хөкүмәтебеҙ беҙҙе алдарға юл ҡуя икән, беҙ бит ашамай-эсмәй пенсия аҡсаларыбыҙҙы үлемтеккә йыйған инек, тип аптыраштылар ҙа, иманһыҙ йәндәр, тип алдаҡсыларҙы ҡарғай-ҡарғай өйҙәренә таралыштылар.

**Гаян ГАРИПОВ.**




# ТУҘАН



Юмореска

Сәми эштән ҡайтҡас, диванға һуйлайып ятты ла, телевизор ҡабыҙҙы. Яңылыҡтар бара, һаман да шул кризис тураһында һөйләйҙәр. Америкала банкылар бигерәк ауыр хәлдә икән. Францияла эшһеҙ ҡалыусылар урамдарға сыға. Австралияла урмандар яна, Италияны һыу баҫа. Үәт, мәхшәр, донъяның бөтөнләй рәте китте. Быға нәмә сәбәпсе икән, экология торошо хөртәйәме, әллә ил башлыҡтарындамы ғәйеп? Ер шарына ҡурҡыныс янамаймы икән, берәй метеорит килеп төшмәһен тағы. Марсҡа сығып ҡасып булмай бит инде. Ә ул Марста тормош бармы икән, юҡмы?

Көсөргәнешле уйҙарҙан Сәмиҙең мейеһенә көс төштө, буғай, сикәләре ҡыҫып ҡуйҙы. Ул, телевизорҙы һүндерҙе лә, уфтанып, икенсе яғына әйләнеп ятты. Бүлмәлә тынлыҡ урынлашты, кухняла ашарға әҙерләп йөрөгән ҡатынының шатыр-шотор килеп йөрөүе генә ишетелә.

Ҡатын бигерәк рәхәт йәшәй, тип көрһөнөп ҡуйҙы Сәми. Донъялағы кризис та, Австралиялағы янғын да, Италияны һыу баҫыуы ла борсомай уны. Үҙенә юҡ-бар эш табып, бер нәмә күрмәй, белмәй тыныс ҡына йәшәй бирә. Ашарға бешәме икән, тәмле еҫтәр танауҙы ҡытыҡлай былай.

Тамаҡ ялғап алғас, Сәми бөгөнгө гәзиттәрҙе ҡараштыра башланы. Дә-ә, илдең алтын запасы бер аҙ кәмегән икән. Шәп хәбәр түгел был, бер ҙә шәп түгел.

– Сәми, картуф бөтөп килә, ярты биҙрәләй генә ҡалды, иртәгә юл ыңғайы баҙарға кереп сығырһың әле. – Һауыт-һабаны йыйыштырып алғас, кер йыуырға тотонған ҡатынына ире яуап ҡайтарманы. Илдә алтын запасы кәмегән мәлдә ярты биҙрә картуф хаҡында һүҙ башлаған ҡатынын йә әрләп ташлармын тип ҡурҡып, өндәшмәне.

Ҡара әле, башҡа цивилизациялар ҙа булырға тейеш тип яҙалар, булһа, хәтәр бит. Йыһандағы бөйөк шартлауҙан, туҙандан яралған күктәге есемдәр араһында тормош булған, аң-белем кимәле буйынса беҙҙән өҫтөнөрәк тороусы йән эйәләре лә барҙыр, бәлки.

– Сәми, балаҫтарҙы ҡағып индер әле, саң баҫҡан. – Керҙәрен элеп, иҙән йыуырға тотонған ҡатынының был һүҙҙәренән һуң ир ярһыуынан өндәшә алмай торҙо. Башҡа донъялар, глобаль мәсьәләләр хаҡында уйланып ятҡан кешене балаҫ туҙанын ҡағырға ҡушсы әле. Масштабтар бөтөнләй икенсе түгелме һуң?

– Баш ауырта, ятып торам әле, – тип, ир ҡабат диванға һуйлайҙы. Ята торғас, ҡатынына булған асыуы бер аҙ һүрелде. Хәйер, уларҙан нәмә көтәһең инде, бөтөнләй икенсе планета кешеләре бит улар, ваҡ-төйәк менән булашып ғүмерҙәре уҙа. Сәми кеүек тотош йыһан, планеталар, илдәге алтын запасы хаҡында уйланырға баштары етәме ни уларҙың?! Шуларҙы тыңлап, хәҙер Сәми балаҫ ҡағырға сығып китһен, имеш.

Сәми икенсе яғына боролдо ла, бер аҙҙан хырлап йоҡлап та китте.

**Марат ӘМИНЕВ.**

Ғибрәт

# Бала иҫәбенә

Иҫемә төшһә, һаман иҫем китә, тигәндәй, минең генә иҫемде китәргән хәлдәр бүтәндәр өсөн ғәҙәти күренештер, бәлки. Әтүһә, юҡ-барҙы телевизорҙан күрһәтмәҫтәр ине әле! Ана, ҡайһылыр өлкәлә, бәләкәй генә ауылда бер ҡатын алты айлыҡ балаһын астан үлтергән. Тикшереүселәр был өйҙә аш-һыуҙан тик иҫерткес эсемлектәр генә таба. Улар араһында бала ашамлыҡтарының бер валсығы ла булмай. Ә эскесе әсә үҙенең тамағын ниндәй аҡсаға туйҙырып ятҡан? Балалар пособиеһына. Бахыр сабыйҙың үле кәүҙәһен тышҡа сығарып ырғытҡас, ҡатын өйөнә дуҫтарын йыйып, онотолоп китеп өс көн байрам иткән. Суд барышында уның йөҙөндә бер ниндәй ҙә үкенеү саткылары булмай. Киреһенсә, ул оятһыҙ күҙҙәрен йәшерергә лә тырышмай, объективҡа тура ҡарап, ниҙер һөйләнеп маташа... Ошо ла булдымы яңылыҡ, тиерһегеҙ. Имеш, иҫте китәрә...

Эйе, ышанмаҫһығыҙ, ләкин иҫемә төшһә, һаман иҫем китә. Бынан ике йыл элек, республикабыҙҙың 4-се клиник балалар табыу йортонда ятып сығырға тура килгәйне. Тәү тапҡыр әсә булыу бәхетен шунда татыным. Әле беренсегә ҡулыма ҡурсаҡ алып уйнай башлағандағы татлы хыялым бер аҙ һуңлабыраҡ, ләкин үтә лә ҡәҙерле булып тормошҡа ашты. Тәүге көндәрҙә ашауымды, төн йоҡоларымды онотҡансы сабыйым янынан китә алманым. Бер мәлгә генә уны ҡалдырһам, мине юғалтып, илап бөтәр төҫлө ине. Ә бит уның, был донъяға яңы ғына ауаз һалған кескәй йән киҫәгенең, әсәнән башҡа яҡындарҙан-яҡыны ла юҡ. Әсә уның өсөн тыныслыҡ, йылылыҡ, шатлыҡ һәм терәк.

Минең менән палатала республикабыҙ райондарының береһенән килгән йәш кенә ҡатын да бар ине. Уның ҡыҙы тыуҙы. Балаһын ике көн буйына үҙенә алманы. Имеҙергә тип алып килһәләр, карауатының ситенә генә һалып ҡуя ла, үҙе алыҫыраҡ китеп ҡарап тора. Әле бер ни аңламаған баяғы бала, морон төртөп әсәһен эҙләп ҡарай ҙа, тауыш та сығармай, йоҡлап киткән була. Әгәр шунда ҡысҡырып илаһа, әсә кеше ярһып-ярһып тиргәргә керешә: «Йә, ниңә тыуҙың инде йән көйөгә булып! Хәҙер баштан уҡ холоҡ күрһәтеп илайһыңмы, сволочь?!»

Өсөнсө көн төнгөләккә ҡалдырып киткәс, балаһының еүеш йүргәктәрен дә алыштырмай, ашатырға ла онотоп, эңер төшөр-төшмәҫтән, баяғы ҡатын йоҡлап та китте. Сабыйы ныҡ илағас, түҙмәй, ҡулға алдым. Сестралар әҙерләп килтергән балалар өсөн ҡатнашманы биргәс, йүргәктәрен дә алыштырғас, сабый бер аҙ тыныслана төштө. Шунан миңә һыйынып ҡына йоҡлап китте. Әсә кеше был ваҡытта бер нәмә күрмәй ҙә, ишетмәй ҙә хырылдап төмле төштәр күреүен генә белә ине...

Больницанан сығыр көндә иртә таңдан тороп, теге ҡатын үҙен тәртипкә килтерә башланы. Ярай, бында баланды тейешенсә ҡарап, төрөп сығаралар. Ә өйгә ҡайтҡас? Ниндәй мөхиткә барып эләгә бахыр бала? Телевизорҙа күрһәтелгән кеүек тамамланмаҫмы сабый яҙмышы? Шулай ҙа иҫәнлек-һаулыҡ, балаға етеш тормош, бәхетле бала саҡ теләп оҙаттым күршеләремде.

Әлеге лә баяғы иҫем китә, тигәндә иҫләһәм, инде бер аҙ тынысланғанмын да кеүек. Ә бына ошондай ғибрәттәр, ниңәлер ҡайһы берәүҙәргә өлгө булып барып етеүе барыбер иҫте китәрә. Илебеҙҙәге демографик хәлде яҡшыртыу буйынса саралар күрелә башлағас, бала табыусылар күбәйеп китте. Ләкин вәғәҙә ителгән компенсацияға алданып, бала йәнен ҡорбан итеү нимә тип атала ул? Ошо хаҡта уйлаусылар бармы һеҙҙең арағыҙҙа, әсә булған кешеләр? Әллә һеҙ ҙә, минең кеүек, иҫегеҙгә төшөргән һайын иҫегеҙ китеп уйланаһығыҙмы?..

**Р. ЫРЫҪҠУЖИНА**



С. КАШАПОВА










# Кәрәгендә алдыңмы?

**(Булған хәл)**

Өс йыл ярым әрмелә йөрөп, 1956 йылдың май аҙаҡтарында ауылға ҡайттым. Шул осорҙа ауылда яңы һүҙҙәр, яңы лаҡаптар барлыҡҡа килгән. Август урталарына, йәғни эш һорап РОНО-ға барғанға тиклем, колхозға эшкә сыҡтым. Силос һалыуҙа, унан бесәндә йөрөнөм. Берәй хәбәр әйтһәң, уны һәр саҡ киреһенә һаплайҙар.

Бына бер саҡ Һаҫыҡ яланында бесән сабабыҙ. Үлән әллә ни күтәрелмәгән, әммә еләк уңған, сапҡан урында тәгәрәшеп ятып ҡалалар. Звено етәксеһе урта йәштәрҙәге ағайға:

– Нөғәмән ағай, алдың ҡып-ҡыҙыл, – ти Вазифа, ныҡ бешкән еләктең тулып ултырыуын әйтмәк булып.

– Уның ҡарауы, үҙе әлегә ҡыҙыл түгел, – тип һаплай Әсмәбикә тигән ҡатын. Күмәкләп көлөшәбеҙ ҙә, эште дауам итәбеҙ. Шулай, нимә әйтһәң дә, һәр һүҙҙе шаяртып, кирегә боралар.

Эҫе көндәрҙең береһендә бик ҙур ат күгәүенен тотоп алдым. Арт һанына арҡыры сүп ҡаҙаным да: “Эй, сатан, кәрәгендә алдыңмы!” – тип, осороп ебәрҙем.

– Уны миңә төрттөрөп әйтмәйһеңме? – тине яҡындараҡ торған Гөлнәзирә.

– Нишләп һиңә төрттөрәйем ти, күгәүенгә әйтәм. Ана бара осоп, самолёт шикелле фырылдап...

– Ул һүҙҙәрҙе тәүҙә мин әйткәйнем. Шунан башланды, – тип аңлатты был. – Өләсәйем уйынға барайым тиһәм, ҡаршы килә лә тора. Бер кис шулай уйынға тип сығып барһам, өләсәйем, ебәрмәйем, тип, минең юлға торҙо. Ул сатаныраҡ ине бит. Әҙерәк эткәйнем, ҡолаҡ ла китте. Шунан ни: “Эй, сатан, кәрәгеде алдыңмы!” – тип сығып йүгерҙем.

Шулай итеп, был лаҡап булып киткән һүҙҙәрҙең эйәһе билдәле булды миңә.

Уңайы тура килгәндә, был лаҡапҡа әйләнгән һүҙҙәрҙе, йә үсәү, йә мәрәкәләү өсөн әле лә әйтәләр.

**Зәки СӨЛӘЙМӘНОВ.**
Бөрйән районы.

Риф МИФТАХОВ

# Көнсөллөк уты

Хикәйә

Батый ҡатыны ҡушҡан йомошто үтәй алмаһа ла, йортҡа күтәренке күңел менән ҡайтып инде. Өҫтән дә һалып тормай ҡулындағы сумкаһынан гәзиткә төрөлгән төргәк тартып сығарҙы ла:

– Бына нимә алдым! – тине, яҡынлашып килгән ҡатынына йылмайып, тантаналы тауыш менән. – Демокрит! Аптыраһындар әйҙә!

Майгөл дә йылмайып ебәрҙе.

– Һәйбәт булған, атаһы, – тине ул, – какрас ит бөткәйне. Сит илдән килгән итме ни, ниңә улай атағандар уны?

– Ниндәй ит булһын! – Батый гәзит эсенән ҙур ғына китап тартып сығарҙы. – Демокрит! Ә был уның китабы!

Майгөл, ни әйтергә белмәй, тамам телдән яҙҙы. Бер аҙҙан ғына иҫенә килеп:

– Һин нимә, аҡылдан яҙа башланыңмы әллә? – тине. – Ул ни хәжәтемә кәрәк? Нишләтмәк булаһың уны?! Ул демократ тигәндәрең былай ҙа әле радионан, әле телевизорҙан башты ҡатырҙы бит инде! Илде бөлдөрҙөләр. Ҡуй инде, шуны һатып алмаһаң. Тағы ла кризис тигәнен тапманыңмы? Уны ла һөйләйҙәр, алып ҡайтыр инең.

– Беренсенән демократ түгел, ә Демокрит, яҙыусы. Икенсенән, иҫеңә төшөр әле, киләһе аҙнала кемдәргә ҡунаҡҡа барабыҙ?

– Шунан, барһа? Әллә тыуған көнгә шул китабыңды бүләк итергә уйлайһыңмы? Кеше көлдөрөп...

– Дәүли ҡоҙаға тап-таман була ул. Әтеү, йөрөйҙәр әллә кем булып, имеш, улар ғына бөтәһен дә белә, уҡыған, интеллигентный кешеләр! Беҙ ҙә төшөп ҡалғандарҙан түгел! Һиҙһен, күрһен кемдәр менән аралашҡанын!

– Ҡуй, икенсе нәмә табайыҡ. – Был юлы Майгөлдөң тауышы йомшара төшкәйне. – Йә улар, бигерәк тә Орҡоя ҡоҙағый, кеше араһында мыҫҡыл иттеләр, тип уйлар.

– Юҡ! – тип ҡулдарын ыуғылап ҡуйҙы Батый. – Кем өҫтөнөрәк, кем культурный икәнде аңлаһындар. Демокрит... Уны белә тиһеңме улар? Бына шунда аңлайбыҙ инде, кемдәр ул интеллигенттар!

Майгөл, эстән ризалашып етмәһә лә, иренең уй-теләгенә ҡаршы сыҡманы, бары:

– Тик һин уның яҙыусы икәнен нықлы беләһеңме һуң? – тип кенә һораны.

– Ваҡыт бар, асыҡларбыҙ, – тине лә Батый, өҫ-башын һалып, китабын ике ҡуллап тотҡан килеш ҙур бүлмәгә йүнәлде.

Бына ҡоҙаһының тыуған көнө лә килеп етте. Батый был арала Демокриттың кем булыуын асыҡлап өлгөрҙө. Боронғо грек философы икән, беҙҙең быуатҡа тиклем әллә күпме йылдар элек йәшәгән. Әйтәм, китабында хикәйә, повесть кеүек нәмәләре күренмәне. Ярай әле һорашҡан, юҡһа, яҙыусы тип буталыуы бар ине бит.

Батый менән Майгөл, китап янына тағы ҡайһы бер нәмәләр өҫтәнеләр ҙә, Дәүли ҡоҙаларына юл тоттолар. Ҡунаҡтар ултырышып, ҡотлауҙар башланғас, улар ҙа матур ғына һүҙҙәр әйтеп, бүләктәрен тапшырҙылар. Ҡәҙимге генә килеп сыҡты, ҡоҙаһының да, ҡунаҡтарҙың да артыҡ иҫе китмәне шикелле. Хужа кеше уларҙы, рәхмәт әйтеп, ситкәрәк алды ла ҡуйҙы. Ҡайтҡас, Майгөл яңынан ярһыны:

– Әйттем бит мин һиңә, аҡсаны әрәм иттең, тип. Демокрит, имеш! Шуға бер-ике кило ит алып ҡайтһаң, рәхәтләнеп ашар инек. Бахыр интеллигенттар!..

Иртәгәһен көтмәгәндә Дәүли ҡоҙалары килеп инде. Ҡултыҡ аҫтына теге китапты – Демокритты ҡыҫтырып алған. Батый менән Майгөл аптырап киттеләр. Дәүли, иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас, бер аҙ ғына һүҙһеҙ торҙо ла:



С. КАШАПОВА

– Ҡоҙа, – тип Батыйға өндәште, – был китапты һеҙ килтерҙегеҙ шулай бит?

– Беҙ, ә нимә? – тине Батый, тағы ла нығыраҡ аптырап.

Был мәлдә Майгөлдөң бөтөнләй төҫө ҡасҡайны. Әйтерһең, уны яңы ғына бурлыҡ өҫтөндә тотҡандар ҙа быны-быны хөкөм сығарасаҡтар. Юҡ, йүнһеҙ ире өсөн үҙе булһа ла ғәфү үтенергә тейеш.

Шул саҡ Дәүли ҡоҙалары күҙҙәрендә нурҙар уйнатып, йылмайып һорап ҡуйҙы:

– Ҡайҙан таптығыҙ уны?

“Вәт нисек көлә, мыҫҡыл итә бит был,”– тип уйлаған Майгөл ауыҙын асырға ғына ниәтләнгәндә, Дәүли, Батыйға яҡынлап, уны ҡосаҡлап тигәндәй:

– Рәхмәт инде, ҡоҙа, рәхмәт! – тине, шатлығын йәшермәй. – Теге көн ҡотлауҙарҙан, баш әйләнеп, юғалып ҡалғанмын, йүнләп рәхмәт тә әйтә белмәнем. Ә бит минең өсөн был иң ҙур бүләк, күпме эҙләп таба алмағайным!

Батый менән Майгөл аптырашып баҫып тик торҙолар. Дәүли түш кеҫәһенән ике билет сығарҙы ла:

– Бына һеҙгә билеттар, уны ике көн сират тороп, опера һәм балет театрына саҡ-саҡ алдым, – тине. – Ирина Архипова менән Мария Биешу килгән бит, беләһегеҙҙер. Рәхәтләнеп тыңлап ҡайтығыҙ. Беҙ үҙебеҙгә нисек тә табырбыҙ әле. Тағы ла бер тапҡыр ҙур рәхмәт һеҙгә! – Дәүли, нисек инһә, шулай йәһәт кенә сығып та китте. Батый менән Майгөл, нимә әйтергә белмәй, ауыҙ асып торҙолар ҙа ҡалдылар.

– Беҙ бит унда бер ваҡытта ла булғаныбыҙ юҡ, – тине Майгөл, ире ҡулындағы билеттарға текәлеп. Тик Батый ғына был юлы аптырап торманы:

– Опера-а-а... ба-а-лет-т... – тине ул, һуҙып. – Уларҙың кемгә кәрәге барҙыр инде? Эт тә аңларлыҡ нәмәләр түгел. Тик барыбер, бисәкәй, барырға кәрәк беҙгә. Беҙҙең кеүек уҡымышлы, интеллигентный кешеләр йөрөй торған урындыр ул. Улар беҙҙе бармаҫтар, наҙандар тип уйлайҙарҙыр әле. Ә беҙ үс итеп барабыҙ! Әйҙә, быны белеп, көнсөллөк уты эстәрен яндырһын! Барабыҙ, бисәкәй, барабыҙ!

Майгөл, ризалашып, баш ҡағып ҡуйҙы.




**– Әлдә һинең ҡулдарың бар әле, ҡәҙерлем!..**
– Хорошо что у тебя есть руки, дорогая!..




**– Бер тапҡыр ойоғомдо үҙем йыуырға булдым әле.**
– Решил хоть раз сам постирать свои носки.

Мар. СӘЛИМ

# Мөхәббәт мәҙәктәре

## БЕР ГЕНӘ

*(Йылғыр егет ауыҙынан)*

Бер ҙә юҡҡа ғына әйтмәгәндәр:
– Һай, был егет йылғыр ҡалай! – тип.
Бер көн шулай
йөрәгән ҡыҙҙарҙың
исемлеген төҙөп ҡарағас,
күҙ аҡайҙы:
– Нишләп былай? – тип.
Йөрәгәнем
йөҙгә барып еткән!
Йә илаһым, минең йөрәгем,
тимәк, булып сыға:
бүленгән
йөҙ киҫәккә генә телемләп...
Шулай булғас, һиңә яратыу ни,
яратмау ни –
барыбер, тимә.
Күктә, ана, йондоҙ меңәрләгән,
ләкин уның Айы бер генә.
Йөрәгәне йөҙгә тула ла бит,
ятратҡаны бары бер генә.

## ЫШАНЫУЫ ҠЫЙЫН

Эреләнеп китеп барған инең,
Ҡайтҡанһың бит тәки һағынып.
Күңел асыҡ минең, тағы ла
Ҡабул итәм...
Торма ялынып.

Ярар инде, ҡурҡып һанама ла
Аҙымдарың миңә уҙаһы...
Үп әйҙә, үп үҙең түйғансы,
Ирендәрҙең һин бит хужаһы!

“Ғүмергә!”– тип сығып киткән инең.
Ике көндән ҡайттың үҙемә.
Һине күргәс, шомло төндәр ҙә
Нурлы күренделәр күҙемә.
Ышаныуы ғына ҡыйын хәҙер
“Ғүмергә!”– тип әйткән һүҙеңә.

## БӘЛӘКӘЙ БИСӘ

Юҡ, һин сәйәхәтсе түгел.
Ә шулай ҙа
минең өсөн
меңәр саҡрымдарҙы үттең.
Тауҙар, диңгеҙҙәр артынан –
йәһәннәмдең аръяғынан –
килеп еттең.
Килеү менән
тик бер үптең.
Һәм шунда уҡ
ҡуйынымда иренең дә
йоҡлап киттең.





Ғәйеп түгел.
Арығанһың.
Юл ғазаптарын кисереп,
михнәттәргә тарығанһың.
Ял ит әйҙә, бәләкәсем,
шатланып.
Ә мин ҡарап торам һиңә
һоҡланып.
Быуа кескәй ирендәрең,
бәп-бәләкәй танауың,
биткәйең, ҡолаҡтарың,
бәләкәс бармаҡтарың,
ҡулдарың, аяҡтарың...
Әллә инде ҡуйынымда
тағы, тағы...
тағы ла нығ
кесерәйеп ҡалғанһың.
Ғәжәп бит, әй!
Шундай бәләкәй кәүҙәңә
ниндәй ҙур мөхәббәтте
һин һыйҙыра алғанһың!





## ТЫЛСЫМЛЫ ҺҮҘҘӘР

*(Иркә ир ауыҙынан)*

Нисәмә йыл ҡолағымда
һинең бер үк һүҙҙәрең.
Был һүҙҙәрҙе ишеттеңме,
Уттай яна йөҙҙәрем –
Шундай ҡайнар һүҙҙәрең:
– И ҡәҙерле ир генәм,
һин бит минең бер генәм!

Ошо һүҙҙәреңдән генә
Бөтә донъям үҙгәрҙе.
Ҡабатла әйҙә, ҡабатла
Гелән бер үк һүҙҙәрҙе –
Шул илаһи һүҙҙәрҙе:
– И ҡәҙерле ир генәм,
һин бит минең бер генәм!

Һис туймайым, нисә тапҡыр
Тыңлаһам да үҙҙәрен.
Ниндәй тылсымдарға эйә
Икән һинең һүҙҙәрең –
Ошо ябай һүҙҙәрең:
– И ҡәҙерле ир генәм,
һин бит минең бер генәм!





# Дуҫтар күстәнәсе

**“CARICATURA.RU” интернет сайтынан.**












# Мәңгелек өйәнәк

Рәдиф ТИМЕРШИН

**Юмореска**

– Иғтибар, иптәштәр, иғтибар! Минең сиратһыҙ инергә иҫәбем бар. Ниндәйерәк фекерҙәр булыр?

Поликлиника бүлмәләренең береһе ҡаршыһында теҙелешкән кешеләргә мин шулай тип хәбәр һалдым. Был – шаярыу ине, әлбиттә. Сөнки бындай саҡта ниндәйерәк фекерҙәр булырын белеү өсөн министр башы кәрәкмәй. Ишетеү-күреү ағзалары зәғифләнеп бөткән ҡарт-ҡоро башта аңғармайыраҡ торҙо шикелле. Мин ҡысҡырыбыраҡ ҡабатланым.

– Иғтибар, иптәштәр, иғтибар! Мин хәҙер сиратһыҙ инәм. Кем нимә тиер?

Йәшенле ямғыр алдынан бер ауыҡ тынлыҡ урынлашыусан. Был юлы ла шулайыраҡ булды. Әммә был тынлыҡ бары тик секундтың меңдән бере тиклем генә дауам итте. Унан, гүйә, йәшен йәшнәп күк күкрәне, гүйә, йәшен уҡтары тәнемде телгеләргә тотондо, гүйә, баш түбәмә таш яуа башланы...

– Оятһыҙ! Индерермен мин һине!

– Ер бит!

– Әрһеҙ!

– Нахал!..

Әстәғәфирулла тәүбә! Хатта бисәнән дә ишеткән юҡ ине бындай "яғымлы" һүҙҙәрҙе! Сираттағылар иһә, бер-береһенән уҙҙырырға тырышҡандай, йәшенгә тиң нәфрәт уҡтарын миңә табан төбәүҙәрен дауам иттеләр. Йөрәк тәңгәленә тоҫҡап, әлбиттә. Йөрәге ярылып үлһен, типтер инде.

– Хайуан!

– Суҫҡа!

– Йылан!

Иң ҡойроҡта торған аҡһаҡ бабай, ҡул таяғын болғай-болғай, миңә табан килә башланы. Мин сараһыҙҙан дипломатым менән башымды ҡапланым: ысынлап та йәшен һуғасаҡ хәҙер! Етмәһә, сираттағы халыҡ был "йәшен аллаһы"н өшкөртөргә тотондо:

– Бәр, ҡыҙғанма!

– Үлтерә һуҡ!

– Мейеһен сәсрәт!..

"Йәшен аллаһы" иһә миңә тамам яҡынайҙы.

– Тай бынан иҫән саҡта, мейеһеҙ! – тине ул, ярһып. Ярһыуы, асыуы шул тиклем хәлгә еткәйне ки, хатта ауыҙынан протез тештәре атылып килеп сыҡты! Әмәлгә ҡалғандай, улар "шап" итеп бер әбейҙең маңлайына килеп тейҙе! Тегенең йыйырсыҡлы маңлайы ике урындан күбеп сыҡты. Заманында был әбей каратист булған




**– Был һиңә интернетта соҡоноу түгел, интеллигент!**
– Это тебе не в интернете ковыряться, интеллигент!

ахырыһы, бик оҫта алым менән йәһәт кенә таш иҙәнгә һылап һалды бабайҙы. Минең мейене сәсрәтергә тейешле кәкре таяҡ икенсе бер ағайҙың елкәһенә барып ҡунды. Ә был ағай – элекке боксёр икән. Ул шундуҡ, ҙур йоҙроҡтарын төйнәп, тәгәрәшеп ятҡан әбей менән бабайға табан ынтылды... Хәҙер ҡорбандар пәйҙә буласаҡ!

– Иптәштәр! – тип ҡысҡырып ебәрҙем мин бар көсөмә. – Иғтибар! Һеҙ мине бая аҙаҡҡа тиклем тыңлап бөтмәнегеҙ. Кем мине сиратһыҙ индерә, шуға ун мең доллар бирермен тип ниәтләнгәйнем. Мин – бизнесмен! – тигән булдым. – Минең бында һерәйеп торорға ваҡыт юҡ. Йә, кем мине үҙ алдына индерә?

Һорап та бөтмәнем, сираттағылар бөтәһе бер юлы хор менән аҡырып ебәрҙе:

– М-и-и-и-и-и-и-и-и-и-и-и-и-н!..

Күк күкрәү ише генә түгел ине был оран. Әйтерһең дә, Ҡаф тауҙары ишелде, мин һиңә әйтәйем! Тау ишелеп бөткәс, бер миҙгелгә тынлыҡ урынлашты. Каратист әбей, ҡулдарын йәйеп, миңә табан килә башланы. Һуғып осора хәҙер, тиһәм, әбей, муйыныма һарылып, биттәремдән үбергә тотондо.

– Бигерәк мәрхәмәтле икәнһең, бәпесем! – ти. – Әйҙә, бынауында баҫ, үҙ сиратымды бирәм! – ти. Әле генә кәкрә таяҡ болғап, минең мейене сәсрәтергә килгән ағас таяҡлы бабай ҡосаҡлап уҡ алды.

– Сиратымды һиңә бирәм дә, аяҡ протезы һатып алам, – ти. – Ғүмерең оҙон булһын, кешелекле кеше икәнһең, – ти.

Икенсе бер бабай: “Рәхмәт яуһын, улым! – ти. – Тыумыштан телһеҙ инем, ниһайәт, “мин” тип телем асылды! – ти. – Баҫ минең алға!” – ти. Халыҡ “М-и-и-и-и-и-и-н!” тип аҡырғандан һуң бер һаңғырау әбей... ишетә башлаған, әйкәйем! “Ун мең доллар, тинеңме әле, балаҡайым? – ти. – Дөрөҫ ишеттемме? – ти. – Мә сиратымды!”– ти. Аҡсаны һәр кемдең дә алданыраҡ эләктергеһе килә ине, әлбиттә. Йәнә ығы-зығы, тауыш-ғауға ҡупты. Табипҡа инеү өсөн торған сират онотолдо, уның урынына тиҙ арала яңыһы пәйҙә булды: быныһы – үҙ сиратын миңә бирергә теләүселәр сираты ине.

– Мин банкыға барып киләм, таралмағыҙ берүк! – тип, йәһәт кенә сығып тайҙым...

Совет заманында бөткәһеҙ сираттарҙа тора-тора шаҡтай тәжрибә туплаған, тамам нервылары ҡаҡшаған был өлкән быуын кешеләрен аңларға була, әлбиттә. Хәҙер инде йүнләп сират юҡ та тиерлек. Әммә ҡайҙалыр сират пәйҙә була икән, элеккеге сират өйәнәге мотлаҡ ҡуҙғала ла китә кешеләрҙә. Хәйер, сират өйәнәге бер заман бөтәр ҙә ул, бәлки, ә бына буштан килгән аҡсаға ҡыҙығыу өйәнәге мәңгелектер, күрәһең.

М. ҒАФАРОВ



# Туҙға яҙмағандарҙан

*(Һөйләшеүҙәрҙән)*

● **Айырылышыуҙың ҡатмарлы икәнлеген беләм, аҫҡалар ҙа өйләнмәҫ инем.**

● **Инспектор һалған 100 һум штрафтың дөрөҫ түгеллеген иҫбатлау мең һумға төштө.**

● **Күкәй нишләп ҡиммәтләнде икән, тип аптырайһыңмы? Бензингә хаҡ артҡан бит.**

М. ҒИЛӘЖЕВ ишетте.

Р. ШӘЙХЛИСЛАМОВ



## “Экстрасенс”

Мин арып-талып Өфөнән ҡайтып киләм. Ҡапҡа төбөндә баҫып торған әсәйем мине күреп, аҙға ғына туҡтап:

– Ҡыҙым, һин сәйҙе үҙең генә эс инде. Мин клубҡа дауаланырға ашығам, – тине лә шәп-шәп атлап китеп тә барҙы.

Клубта ниндәй дауаланыу була икән, тип аптырап та өлгөрмәнем, әсәйем ҡайтып та инде. Ул ошоларҙы һөйләне:

– Бөгөн ауылға “экстрасенс” тигән врач килде бит. Төшкә тиклем бөтә ҡарсыҡтар клубҡа йыйылдыҡ. Теге ир, илле һум аҡсаны йыйып алды ла, беҙҙе гипноз тигән йоҡо менән йоҡлатты ла ҡуйҙы. Төштән һуң тағы килергә ҡушты. Һин ҡайтҡанда мин шунда икенсегә китергә сыҡҡайным бит. Был юлы уңышлы булманы дауаланыу. Аҡсаларҙы уға бирергә йыйып ҡына бөткәйнек, клубҡа бригадир килеп инде лә:

– Ярай, аферист, төшкә тиклем йыйған аҡсаны алғанһың икән инде, быларын мин алам, клубтың кәрәк-ярағына булыр. Һинең лицензияң юҡ, һиңә күп булыр,– тип беҙҙең барлы-юҡлы байлыҡты кеҫәһенә һалып сыҡты ла китте. Тегени, врач, иларҙай булып торҙо ла ҡалды. Аҡса уға эләкмәгәс, беҙҙе был юлы йоҡлатып та тормайынса тайҙы. Һөйөнөскә булманы был “экстрасенс” тигәндәрең.

## Раз-два байрамы...

Әсәйем мин эштән ҡайтыуға бармаҡтарын бөгә-бөгә ниҙер иҫәпләй ине. Минең аптыраулы ҡарашыма ул:

– Раз-два байрамы ла етеп килә икән! – тип һалдырҙы.

– Ниндәй байрам тиһең, әсәй? – тигән һорауыма ул:

– Һуң шул раз-два байрамын да белмәйһеңме ни? 7 ғинуарҙағы байрамдың исеме шулай ҙа инде, тип аңлатты әсәйем. Баҡһаң, ул “Рождество” тигән байрамды радионан шулай ишеткән икән.

## Онотолмаҫ таҡмаҡ

Ятаҡтың бүләкәй генә бүлмәһендә ҡатыны, балалары менән йәшәгән бер артисҡа ҡунаҡҡа барҙыҡ. Беҙ килеп ингәндә, ул ҡатыны менән кухнянан сәйнүк тотоп килеп сыҡты. Шул саҡ артист дуҫыбыҙ йәһәт кенә бейеү көйө ҡуйҙы ла, дөпөлдәтеп:

Айҙар генәйем,
Байҙар генәйем,
Юлбашсыбыҙ Ленин, Брежнев
һәм Нуриев генәйем,– тип бейей башламаһынмы.

– Аптыраған инде, квартира алып булмай бит, әллә ауылдарҙа гастролдә йөрөгәндә ошолай таҡмаклап, бейеп ҡарарға микән? Бер нисек тә ялағайлана белмәйем бит, – тип аңлатты артист үҙенең мөшкөл хәлен һөйләп.

Һуңынан фатирлы булды, әлбиттә. Ә беҙҙең иҫтә уның таҡмағы ғына ҡалды.



## Мунсала

Һыуыҡ тейҙергәс, мунсаға барып дауаланырға уйланым. Пар бүлегенә кереп, тирләргә эскәмйәһенә менеп ултырҙым, тик бында ла йүтәл ебәрмәй ҙә ҡуя. Эргәмдә ике матур ҡатын миндек менән сабына башланылар. Бер мәл йүтәл тауышын ишетеп, береһе миңә табан боролоп:

– Апай, әллә һеҙҙең миндегегеҙ ҙә юҡ инде? Ҡайҙа, беҙҙең миндек икәү, береһен ҡайнар һыу менән сайҡап һиңә бирәйек әле, – тине.

Бирелеп кенә ҡалманылар, миндектәре менән шап та шоп мине саба ла башланылар. Бал, тоҙ менән битемде, арҡамды ышҡынылар. Еңел булып китте. Һүҙ араһында берәүһе:

– Апай, һеҙҙең мәғлүмәтегеҙ күпме? – тип һораны. Юғары белемем бар тип нисек маҡтанаһың инде?!

– Белем юҡ шул, – тинем.

Былар бер-береһенә ҡараштылар ҙа:

– Шулай инде, белемһеҙ кеше ошолай йәшәй инде ул. Белемһеҙ кешегә эш хаҡын да йүнләп түләмәйҙәр, – тип мине йәлләп тә ҡуйҙылар.

– Һеҙ үҙегеҙ ҡайҙа эшләйһегеҙ? – тип һораным, мин дә үҙ сиратымда.

– Беҙ дворник булып эшләйбеҙ, ике-өс ставка алып барабыҙ, аҡсаға интегеп йәшәгәнебеҙ ҙә юҡ, – тинеләр ҙә мине тағы ла саба башланылар.

**Зинәйҙә ДИНИСЛАМОВА.**
Өфө ҡалаһы.



# Йыуанысым һәм өмөтөм

**Юмореска**

– Сәләм, Кашап. Был мин – Әйүп. Ней, Кашап, мин бөгөн эшкә килә алмаçмын, ахырыһы. Һин бригадирға ғына әйтерһең әле. Миндә трагедия... Етмәһә, бахмур. Бына, телефондан һине көскә табып алдым да шылтыратып ятамын.

– Ул ниндәй драма һәм бөтмәç эскелек?

– Кашап друг, кисә һин бит үҙең мине һыйлап ташлағанһың.

– Ә-ә-ә, аҙ ғына иçләйем.

– Но ты даёшь, Кашап. Иçләйһең икән әле. Һиндә өмөт бар.

– Ә ниндәй жанр тиһең бөгөн һиндә?

– Көләһең инде минән. Көл. Рәхәтләнеп көл. Хатта ер һелкенеп торһон. Шаяртырға эшкингәнеңә ҡыуан. Ә миңә ҡарама. Мин инде үлергә яттым.

– Йә, ярай, прости, Әйүпкә друг. Һин әйт әле, беҙ кисә ҡайһы ергә тиклем барып еттек ул?

– Эх, Кашап, Кашап. Мин булмаһам, һин нимә эшләр инең? Шул эскелегең арҡаһында йәшлегеңдең яртыһын иçләмәйһең. Беҙ тәүҙә һыра менән башланыҡ. Һуңынан араҡыға күстек. Ә потом инде Феняға индек. Көмөшкә алырға.

– Ә-ә-ә, иçләнем. Мин ишеген асып ингәнемде иçләйем. Һуңынан...

– Насарһың, тиҙ бирешәһең. Әллә ниңә шулайһың. Аҙаҡ беҙ икәү Феняла ҡалыуҙы хуп күрҙек. Һин бәхетле. Сөнки һин ҡайтып киттең. Ә мин, ахмаҡ, ҡалғанмын.

– Шунан?

– Ә шунанмы? Тап ошо ерҙән минең лаҡап түләүле китә.

– Ярай, ярай, берәй һыра ултыртырмын. Әйҙә, һайра дәльше.

– Һин улай минең менән эре һөйләшмә. Һинең өсөнсө разряд әле. Ә минеке дүртенсе. Эй, һөйләмәçмен дә ҡуйырмын. Настроениемды төшөрҙөң.

– Ике һыра ҡуйырмын.

– Яңы ҡатыным йыуанысымды һәм өмөтөмдө йомарлап ташланы ла мине әсе итеп әрләп, эшкә сығып китте. Әлдә кисә Феня менән донъяның ләззәтен тойоп ҡалғанмын.

– Ә хәҙер ни эшләйһең инде?

– Бына ауырып ятамын.

– Ә ниңә ҡатының шулай нығ туҙынды?

– Ә-ә, ғәйеп миндә лә бар шул. Ярай, улай нығ өҙгөләнмәйек. Мин хәҙер һиңә “ашығыс ярҙам” саҡыртырмын. Һин ҡыбырламай ғына ят. Берәй зараза индерерһең.

– Миңә хәҙер бер кем дә ярҙам итә алмай. Бына бит, Фенямың яңғыҙлығын, аҙ ғына булһа ла үҙем менән тулыландырам тигәйнем дә...

– Их, дуç, дуç. Тынысылан инде. Хәҙер бит медицина көслө.

– Ой, Кашап! Ой, не могу! Мине ҡотҡарығыҙ! Бүтәнсә хәлем юҡ. Башҡаса бер һүҙ ҙә өндәшмә. Мин бөгөн көлә лә, илай ҙа алмайым. Әйтеп торам бит, бөтә тәнем ауырта. Ой!..

Телефондың теге яҡ осонда яңы ғына илап ятҡан ирҙең шарҡылдап көлөп ебәргәне ишетелде:

– Һин мине саҡ ҡына дөрөç аңламағанһың. Мин бит ҡағыҙ тураһында һөйләйем.

Врачтарҙан ояла-ояла алған рецепт һәм “Виагра” тигән дарыуҙы әйтәмен. Уларҙы исемләп әйтергә телем бармай. Шуға йыуанысым һәм өмөтөм тип йөрөтәмен... Ә һин нимә тип уйланың?

– Ахмаҡ, ә мин нимә уйларға тейеш? Ә хәбәрҙәргә килгәндә, уларҙы еткерә һөйләргә кәрәк. Драматург. Йәнәһе бөгөн унда трагедия...

**Гөлназ МӘҮЛЕТҠОЛОВА.**
Баймаҡ ҡалаһы.



М. ХӨРМӘТОВ




## Хикмәте хәрефтә

# Сөгөлдөр сәскәндә

Сөгөлдөр сәсергә Самат, Садиҡ, Сәмиғулла саҡ-саҡ сыҡтылар. Силкәлә сәсеүселәр саңға сөскөрәләр. Стажёр Сәмиғулланың сәнскегә салғыйы сермәлде. Сығырынан сығып, Сәмүк-Сәмиғулла сейләнде, сыҙамай сөңкөлдәне. «Сәсмәйбеҙ, сәсһәң дә сырмалсыҡ, сәнскәк сығасаҡ. Статья сәпәмәҫтәр. Советтар Союзында сәстек, сәсә-сәсә сырхауландыҡ», – тип сыйылдашты сөгөлдөрсөләр.

Суҡраҡ сос Самат самогонсы Сәмиғәгә сапты. Самогонды стаканлап сәкәштереп сылатҡас, сәсеүселәр сихәтләнделәр, салҡанландылар. Сәмсел Сәмиғулла Саматтың сикәһенә сапты, Самат сауҡалыҡҡа сапты. Сикәһе сыйылғайны. Самат сирен Сәриғәнән сайҙырҙы.

Сәсеүселәрҙе силсәүиткә саҡырҙылар. Сирекләп, спиртлап сәскән сөгөлдөр сыуаҡта ла, селләлә лә, сентябрҙә лә сыҡманы. Сәсеүлеккә сүп, сәнскәк, сырмалсыҡ ситләүгәсә, сиҙәмгәсә сәсрәп сауҡалыҡҡа сырмалғайны.

**СИлфат СИшҡыуатов.**
Баймаҡ районы.




Салауат ӘБҮЗӘР

# Һигеҙенсе мөғжизә



Ерҙә – ете мөғжизә, тип
Хата фекер йөрөй фәндә.
Ә минеңсә, ете түгел,
Һигеҙ улар, кәм тигәндә.

Фән ярата иҫбатлауҙы,
Иҫбатлайым, пажалыста.
Һүҙҙәремде раҫлап торор
Ағай-эне, бажа, дуҫ та.

... Һине наҙлап ятҡыра ул,
Һин тороуға, торған була.
Күҙҙе асып өлгөрмәйһең,
Һыйлы табын ҡорған була.

Кер машинаң алыҫ торһон,
(Тел төбөмдө һиҙәһеңме?)
Өҫ-башыңды йыуып ҡуя,
Йыуып ҡуя иҙәнеңде.

Сығып саба магазинға...
Ғәҙәтенсә беҙҙең брат
Диванында ята бирә,
Гәзит ҡарап, ТВ ҡарап.

Уның менән ярышалмаҫ,
Бер ниндәй ҙә аппаратың.
Һигеҙенсе мөғжизә ул –
Һинең ҡатын, минең ҡатын.

## Әйтелмәгән әйтемдәр

- Йәшлегеңдә һуҡмаҡ һалһаң, ҡартлығыңда оло юл булыр.
- Баланы матур булғаны өсөн генә яратмайҙар.
- Һатлыҡ дуҫҡа ҡарағанда намыҫлы дошман яҡшыраҡ.
- Ояла белеү ҙә насар түгел.
- Көслөнөң һүҙе дөрөҫкә сыға.

**Миҙхәт ЯХИН.**
**Туймазы районы.**

# Көлгәнгә – көлкө

– Энекәш, атайың өйҙәме?
– Юҡ.
– Тиҙ ҡайтамы?
– Әгәр үҙен тәртипле тотһа, ун йылдан...

Ҡарт бабай әтәсен һатырға тип баҙарға китә. Һатып алыусылар әтәс янына киләләр ҙә:
– Бабай, әтәсең тауыҡтарҙы тапаймы? – тип һорайҙар икән.
– Тапай-тапай, тауығын да, өйрәген дә, ҡаҙын да ҡалдырманы инде, – ти.
– Ә нишләп улай булғас, әтәсте һатырға булдың әле?
– Был мәлғүн минең ҡатынға ла күҙ һала башланы бит...

Л. РАЯНОВА ишетте.

– Сәриә, мин бер дуҫымды кискә ашҡа саҡырҙым.
– Ахмаҡландыңмы әллә?! Бүлмәләрҙә тәртипһеҙлек, һауыт-һаба йыуылмаған, ашарға бер нәмә лә юҡ!



– Шуға саҡырҙым да инде. Әйҙә, бөтәһен дә күрһен, юҡһа, һуңғы ваҡытта өйләнеш алыу тураһында йыш һөйләй башланы.

– Кисә йөрөгән ҡыҙға бөтә-бөтә гонаһтарымды һөйләнем дә бирҙем.
– Шунан?
– Ярҙам итмәне: ике аҙнанан туй үткәрергә нығыраҡ әҙерләнә башланы.

Р. ФӘЙЗИЕВ.

Хансура телевизор ҡарай. Унда яңғын күрһәтәләр. Хансура күҙҙәрен ышҡый-ышҡый:
– Әсәй, телевизорҙы һүңдерә һал, күҙемә төтөн керә, – ти икән.

Әсәһе аш бешерә, тәмләтергә укроп һала. Хансура быны күреп:
– Микроп һалаһыңмы? – тип һорай ҡуйған.

Ауылдан тәү тапҡыр килгән Хансура троллейбусты күреп:
– Әсәй, автобустарҙың да мөгөҙө була икән, ҡарасы! – тип аптыраған.

Ф. ЛАТИПОВА.



– Әсәйем эштән ҡайтыуға йомортҡа бешереп ҡуяйым тигәйнем, – тип зарлана 9 йәшлек Дилә әхирәтенә, – бер сәғәт ҡайнай инде, һаман бешмәй, ҡап-ҡаты...

М. ЗАРИПОВ.

## Хөрмәтле уҡыусылар!



Белеүегеҙсә, бөтә нәмәгә лә хаҡтар артып тора. Матбуғат сараларына яҙылыу хаҡтарының шаҡтай артыуы көтөлә. Ә шулай ҙа 31 мартҡа тиклем 2009 йылдың икенсе ярты йыллығына "ҺӘНӘК"кә элекке хаҡтар менән яҙылып ҡалырға мөмкин. Шуға күрә почта бүлексәләренә ашығығыҙ, хөрмәтле дуҫтар!

**"ҺӘНӘК"тән айырылмағыҙ, бергә булайыҡ, бергә көләйек!**


ҺӘНӘК
№ 3 (1198)
ISSN 0208–094X
"ХЭНЭК" ("ВИЛЫ")
Ежемесячный журнал сатиры и юмора на башкирском языке.
Издается с сентября 1925 г.

Журналды ойоштороусылар:
Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте.

Адрес редакции: 450079, г. Уфа, ул 50-летия Октября, 13, "Хэнэк" ("Вилы").
Телефондар:
Баш мөхәррир 272-91-02
Баш мөхәррир урынбаҫары 272-52-82
Бүлектәр 272-87-43, 272-52-82

Подписка на журнал принимается без ограничений на всей территории страны.

Беҙҙең сайт: henek.pressarb.ru
Индекс 73456

Мәҡәләләрҙә килтерелгән факттарҙың дөрөҫлөгө өсөн уларҙың авторҙары яуаплы.

Баш мөхәррир Марсель СӘЛИМОВ
Мөхәрририәт һәм редакция советы:
Александр АНДРЕЕВ (бизәлеш бүлеге мөхәррире), Венер ИСХАҠОВ (фельетондар бүлеге мөхәррире), Риф МИФТАХОВ (әҙәбиәт бүлеге мөхәррире), Марат ӘМИНЕВ (яуаплы сәркәтип), Рәзилә ЫРЫҪКУЖИНА (хаттар бүлеге мөхәррире), Хәлил ӘХТӘМОВ (баш мөхәррир урынбаҫары), Артур ВАСИЛОВ, Мансаф ҒИЛӘЖЕВ, Марат КӘРИМОВ, Рәсих ХАННАНОВ, Венера ХӘКИМОВА, Марат ӘБДҮШЕВ.

Сдано в набор 11.02.09. Подписано к печати 12.03.09. Офсетная печать. Усл.-печ.л. 2.Уч.-изд. л. 3,56. Формат 70х100 1/16. Зак. №16. Тираж 3886.

Корректор З. МАЗҺАРОВА

Журнал зарегистрирован в Министерстве печати и массовой информации РБ. Свидетельство о регистрации № 687 от 15.12.1995 г.



Цена в розницу свободная. © "ҺӘНӘК", 2009



Отпечатано в типографии ГУП "Издательство "БАШКОРТОСТАН".

# Кәләсворд









**Горизонталь буйынса:** 1. Бәхәс. 3. Кәнфит төрө, йәки емеш ҡыуағы. 7. Заманында Ер шарында хакимлек иткән йән эйәһе. 8. Кавалеристарҙың байрағы. 9. Вьетнамдарҙың иң ихтирамлы олатайы. 12. 1-се фото. 15. Кофе сорты. 16. Балеттағы хәрәкәт элементы. 18. Донъя ҡыйығы. 19. Супербай кеше. 22. Ҡош, йәки тропик емеш. 23. Диңгеҙ ҡыҫалаһы. 25. Рәсәй геликоптеры. 26. Боронғо Рим философы. 28. Ишәктең һүҙе. 31. 2-се фото. 32. "Бони-М" төркөмөнөң тыуған иле. 33. Ер ҡатламдарының хәрәкәтен өйрәнгән фән. 34. Йыһан есеменең һуҡмағы.

**Вертикаль буйынса:** 1. Көнсығыш илдәрендәге монарх. 2. Француз рәссамы. 4. Б. Гребенщиковтың музыкаль төркөмө. 5. Ылыҫлы ағастан алынған ревматизм дарыуы. 6. В. Путин мауыҡҡан спорт төрө. 10. Минерал, йәки болгар тәмәкеһе. 11. Штирлицтың таныш дин әһеле. 13. Алма сорты. 14. Ауыл тормошона дан йырлаған урыҫ шағиры. 16. Күп ҡатын алыуҙың биологик аңлатмаһы. 17. Спорт кейеме. 20. Ялҡауҙың дүрт аяҡлы дуҫы. 21. Долларҙағы портрет. 24. Машина кузовы төрө. 25. Зектың тән һаҡсыһы. 27. Мушкетёрҙың ҡоралы. 29. Ҡанатлы уҡсы. 30. Тажик яҙыусыһы.

**Хәлил ӘХТӘМОВ төҙөнө.**

## 2-се һанда баҫылған кәләсворд яуаптары

**Горизонталь буйынса:** 2. Бригадир. 6. Трал. 7. Ура. 8. Сос. 9. Гимн. 10. Тир. 12. На. 13. Межа. 14. ДОТ. 15. Жуков. 21. Гашек. 22. Пентагон. 23. Канат. 25. Трап. 28. Ямб. 29. Анна. 30. Плац. 32. Исаев. 34. Иф. 35. Ра. 36. Иттрий. 37. БМВ. 39. Ас. 41. ТТ. 42. Труд. 43. Альфа.

**Вертикаль буйынса:** 1. Архимед. 2. Блиндаж. 3. Десант. 4. Руст. 5. Лавр. 11. Ипотека. 16. Урал. 17. Обойма. 18. Рама. 19. Шпат. 20. Юнга. 24. Тихонов. 26. Реле. 27. Пацифист. 28. Янғантау. 31. Иврит. 33. Грот. 38. Миф. 40. ИЛ.